ЛЬЮИС КЭРРОЛЛ

# Алиса мөғжизәләр илендә



ЛЬЮИС КЭРРОЛЛ

# Алиса мөҗизәләр илендә



1997

«КИТАП»

ББК 84 Баш
К 25

*Тәржемәсеһе* ***АЙГӨЛ ӘХМӘҘИЕВА***

*Рәссамы* ***ВЛАДИСЛАВ БАЙРАМҒОЛОВ***

К $\frac{4804101000-51}{М\ 121\ (03)-97}$ 113-97

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-02165-3

©«Китап»

Йәйҙең йәмле көнө
  Сағылдыра күҙҙе.
Өйрәнмәгән ҡулда
  Ишкәк тиҫкәреләнде.
Ағым өйҙән беҙҙе
  Йыраҡ алып китте.

Аяуһыҙҙар! Бындай эҫе көндө
  Йоҡо ваҡытында,
Күҙҙе йомоп йоҡлау урынына:
  «Хикәйәңде беҙгә
Тиҙерәк сығар уйлап», —
  Һеҙҙең миңә талап.

Беренсегеҙ: «Башла!» —
  Тип ҡабаландыра.
Икенсегеҙ: «Ҡыҙыҡ,
  Булһын, — ти, — мажара!»
Өсөнсөгөҙ бер туҡтауһыҙ
  Беҙҙең һүҙҙе бүлдерә.

Тынлыҡ булды бер саҡ,
  Мөғжизәләр илен
Төштә күргән һымаҡ;
  Уйсан бер ҡыҙыҡай,
Ер аҫтына төшөп,
  Күп ғәжәпкә осрай.

Хыял шишмәһенең
   Һыуы бөттө һымаҡ,
Һөйләрмен аҙағын
   Хикәйәмдең аҙаҡ.
«Һөйлә, аҙаҡ етте!»—
   Тип дуҫтарым әйтте.
Тылсым хикәйәнең
   Мин йомғағын һүтәм.
Ҡояш байығанда
   Әкиәтем бөтә.
Өйгә ҡайттыҡ. Ай нурында
   Ятабыҙ йоҡларға.

Алиса, был әкиәтте,
   Йылдар буйы һаҡла.
Ошо йылы айлы төндә
   Тыныс ҡына йоҡла.
Бала саҡтағы төштәрҙе
   Зиһенеңдә тупла.

## Беренсе бүлек

# ҠУЯН ОЯҺЫ ЮЛЫНАН

Алисаны апаһы менән яр буйында тик ултырыу ялҡытты; ул апаһы уҡыған китапҡа бер-ике тапҡыр күҙ һалды, ләкин унда һүрәт тә, һөйләшеүҙәр ҙә юҡ ине.

«Һүрәт тә, һөйләшеү ҙә булмаған китаптан ни файҙа?» — тип уйланы Алиса.

Сәскә йыйып, таж үреп ҡарарғамы әллә? Көн битендә ултырған Алисаның башынан ҡабаланмай ғына иренсәк уй үтте. Тиҙҙән ул йоҡомһорап китте. Әлбиттә, таж үрһәң бик яҡшы булыр ине, ләкин уның өсөн урынынан ҡуҙғалғыһы килмәне.

Ҡапыл эргәһенән ҡыҙыл күҙле Аҡ Ҡуян йүгереп уҙҙы. Бының бер аптырарлығы ла юҡ ине. Хатта Аҡ Ҡуян:

— Ай аллаҡайым, һуңлайым инде, — тигәс тә Алиса ғәжәпләнмәне.

(Һуңынан, иҫенә төшөргәндә, Алиса, ни эшләп шунда уҡ аптырамағанмын икән, тип уйлай ине. Ләкин әле бөтәһе лә тәбиғи һымаҡ тойолдо.)

Көтмәгәндә, Аҡ Ҡуян бәләкәй кәзәкей кеҫәһенән сәғәтен сығарғас, Алиса һикереп торҙо. Ҡапыл башына уй килде: бер ҡасан да сәғәт йөрөткән ҡуянды күргәне юҡ ине бит уның! Ҡыҙыҡһынып китеп, Алиса ҡуян артынан йүгерҙе. Тегеһе йылт итеп ояһына инеп юғалды.

Шунда уҡ Алиса ла, аҙағы нисек бөтөрөн уйламайынса, уның артынан йомолдо.



Ҡуян ояһы тәүҙә туп-тура тоннель һымаҡ барҙы, шунан ҡапыл аҫҡа төшөп китте. Алиса, күҙ асып йомғансы, тәрән ҡойоға йығылғандай, аҫҡа осто.

Ҡойо тәрән инеме, әллә Алиса бик яй төштөмө, һәр хәлдә, тиҙ үк иҫен йыйып, тирә-яғын байҡай башланы. Иң тәүҙә ул аҫҡа ҡараны, ләкин унда дөм-ҡара ҡараңғылыҡ. Ҡойо стеналарына төрлө-төрлө кәштәләр теҙелгән, ҡайһы бер ерҙә һүрәт һәм карталар ҙа эленгән. Бер кәштә эргәһенән осоп барған саҡта, Алиса «әфлисун» тип яҙылған ҡайнатма һауытын эләктереп алды, ләкин ул буш булып сыҡты.Һауытты ни эшләтергә белмәй, осҡан ыңғайға аҫҡа ташлап ебәрергә уйлағайны, берәйһенә тейер, тип ҡурҡты. Шулай осоп барған килеш Алиса һауытты икенсе кәштәгә тығып ҡуйҙы.

«Бына, йығылғас — йығылдым, исмаһам! Миңә хәҙер баҫҡыстан йығылыу — бер ни түгел. Ә беҙҙекеләр мине бик батыр тип һанар. Өй башынан йығылһам да ауыҙымды ла асмаҫ инем»,— тип уйланы Алиса. Бәлки, тап шулай булыр ҙа ине.

Аҫҡа. Аҫҡа. Аҫҡа. Берәй ҡасан иге-сиге булырмы бының?

— Бына ҡыҙыҡ, нисә саҡрым осоп төшкәнмен икән? — тип ҡысҡырып һораны Алиса. — Моғайын, Ер шарының уртаһына яҡынаямдыр. Иҫемә төшмәй тора... Дүрт мең саҡрымға яҡын, шикелле...

Алиса ҡайһы бер нәмәләрҙе мәктәптә уҡығандарынан хәтерләй, әле бик уңайлы ваҡыт булмаһа ла (уны барыбер береһе лә ишетмәй ине бит), белемен күрһәтергә тырышты:

— Ҡайһы оҙонлоҡ менән киңлектә икән ул?

Дөрөҫөн әйткәндә, Алиса әле «оҙонлоҡ менән киңлек» тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дә белмәй, ләкин уларҙың яңғырашы оҡшай. Улар шундай мөһим һәм тәьҫирле булып ишетелә!

— Ер шарын үтәнән-үтә осоп сыҡмаммы икән? Бына ҡыҙыҡ булыр ине! Оянан сығам, ә унда кешеләр баш түбән йөрөй! Нисек атала улар?.. Ҡапма-ҡаршылауыҡтар шикелле...

Был һүҙ ни эшләптер башҡасараҡ яңғыраны, шуға күрә Алиса уны береһе лә ишетмәгәнгә ҡыуанды.

— Уларҙан илдәренең исемен һорарға тура килер. «Ғәфү итегеҙ, мин ерҙең ҡайһы яҡ өлөшөндәмен? Был Австралиямы, әллә Яңы Зеландиямы?»

Ошо һүҙҙәр менән Алиса реверанс яһап ҡараны. Һауала эшләгән реверансты күҙ алдыңа килтерә алаһыңмы?

— Улар мине бик наҙан ҡыҙ тип уйлап ҡуйыр. Юҡ, береһенән дә һорамайым! Бәлки, берәй яҙыу күрермен.

Аҫҡа. Аҫҡа. Аҫҡа.

Ни эшләйһең инде, Алиса йәнә телгә килде:

— Динә мине кис буйы эҙләр! Минһеҙ уға бик тә күңелһеҙ булыр.

Динә — бесәйҙәренең исеме.

— Кискелеккә һөт бирергә онотмаҫтар, тип ышанам... Эй, Динә, һин янымда булһаң, күңеллерәк булыр ине. Һауала сысҡандар юҡ, әлбиттә, ләкин бында себендәр күп. Бесәй себен ашаймы икән?

Алиса йоҡомһорап китте. Йоҡо аралаш ул:

— Бесәй себен ашаймы? Бесәй себен ашаймы? — тип ҡат-ҡат ҡабатланы.



Ҡайһы берҙә һүҙе: «Себен бесәй ашаймы?» — тип тә аймылышты. Алиса беренсе һорауҙың да, икенсеһенең дә яуабын белмәгәс, һүҙҙәрҙең торған урыны уны артыҡ борсоманы. Бына ул төш тә күрә башланы: улар Динә менән ҡулға-ҡул тотоношоп китеп баралар, ти, Алиса бесәйенән:

— Динә, һинең берәй ҡасан себен ашағаның бармы? — тип һорай, имеш.

Ҡапыл ниҙер шытырҙап китте. Алиса сыбыҡ-сабыҡ, ҡороған япраҡ өйөмөнә килеп төштө.

Бер ере лә ауыртманы, ул шунда уҡ һикереп торҙо. Башын күтәреп өҫкә ҡараған булды, ләкин унда ҡап-ҡараңғы ине. Ояның тип әйтәйекме, ҡойоноңмо бер боролмаһында Аҡ Ҡуян күренеп ҡалды. Алиса уның артынан йүгерҙе.

Аҡ Ҡуяндың:

— Бөттө ҡолаҡ, ҡалды мыйыҡ! Мин һуңланым! — тигәне ишетелеп ҡалды.

Ҡуян күҙҙән юғалды. Алиса унда-бында әйләнеп ҡараны, те-

ге бер ҡайҙа ла күренмәне. Әҙерәк атлағас, Алиса бер нисә шәм менән яҡтыртылған, әллә нисәмә ишекле оҙонса бүлмәгә барып инде. Алиса ишектәрҙең бөтәһен дә тартып та, этеп тә ҡараны, береһе лә асылмағас, күңел-һеҙләнеп, бүлмәне йөрөп сыҡты.

Ҡапыл күҙе өс тояҡлы өҫтәлгә төштө. Өҫтәл өҫтөндә бәләкәс алтын асҡыстан башҡа бер ни ҙә юҡ. Был асҡыс берәй ишек-тәндер, тип уйланы Алиса, ләкин — әллә йоҙаҡ тишектәре бик ҙур, әллә асҡыс бик бәләкәс булды — Алиса күпме тырышмаһын, уны береһенә лә тап килтерә алманы.

Бүлмәне иғтибар менән ҡарап сыҡҡас, ул пәрҙә күреп ҡалды. Пәрҙә артында — бәләкәй генә ишек. Асҡыс йоҙаҡ тишегенә үҙе кереп ултырғандай булды.

Ишекте асып ебәрһә, унда сысҡандыҡынан ҙурыраҡ ояя. Тубыҡланып ҡарағанда инде — һоҡланғыс матур баҡса күрергә мөмкин. Алисаның гүзәл сәскәләр, һалҡын фонтандар янында йөрөгөһө килеп китте. Ләкин был ишеккә уның башы ла һыймай.

«Башым үтһә лә, ни файҙа? Ҡоро баш ҡайҙа барһын? Эх, ни эшләп мин күҙәтеү торбаһы һымаҡ ҡына йыйылмайым икән? Әгәр ниҙән башларға






белһәм, бәлки йыйылыр ҙа инем», — тип уйланы Алиса.

Уның былай уйлағанына аптырама, Алисаға, бөгөн шундай ғәжәп мажараларға тарығас, хәҙер быныһы ла мөмкин кеүек күренде.

Бәләкәс ишек янында тубыҡланып ултырыуҙың файҙаһы булмағас, Алиса тағы ла берәй асҡыс йәки күҙәтеү торбаһын йыйыу өсөн ҡулланма табылмаҫмы икән, тип өҫтәл янына кире килде.

Был юлы өҫтәлдә бәләкәс кенә шешә тора ине.

— Ул бында бая юҡ ине, мин быны яҡшы иҫләйем!

Шешәгә ҡағыҙ йәбештерелгән, ҡағыҙға матур хәрефтәр менән «Мине эсеп ҡуй!» тип яҙылған.

Быныһы яҡшы ине яҡшылыҡҡа, шулай ҙа Алиса эсергә ашыҡманы.

— Иң тәүҙә ҡарарға кәрәк: шешәнең берәй ерендә «ағыу» тигән билдә ҡуйылмағанмы икән? — тип үҙ-үҙен өгөтләне ул.

Быны белгәненә лә аптырама, күп китаптарҙа балаларҙың төрлө бәлә-ҡазаға юлығып үлеүҙәре тураһында уҡығаны бар ине Алисаның. Ә бөтә был күңелһеҙ хәлдәр балаларҙың ата-әсәләре өйрәткән ябай ҡағиҙәләрҙе үтәмәүенән килеп сыға. Мәҫәлән, уттай ҡыҙған тәртешкәне тотоп торһаң, ҡулыңды бешерерһең; бысаҡты бармағыңа ныҡыраҡ батырып киҫһәң, ғәҙәттә, бармаҡ ҡанай башлай; «ағыу» тип яҙылған шешәне ҡапыл эсеп ҡуйһаң, бер аҙҙан ауырыҡһыныу тойорһоң. Һуңғы ҡағиҙәне Алиса гел иҫендә тота ине.

Ләкин әлеге шешәлә бер ниндәй ҙә билдә юҡ. Алиса эсеп ҡарарға баҙнат итте. Эсемлек бик тәмле булып күренде, ул сейә ҡайнатмаһын да, ананасты ла, ҡыҙҙырылған күркә итен дә, баллы һыуҙы ла, бәлеште лә хәтерләтте. Алиса бөткәнсе эсеп ҡуйҙы.

* * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * *

— Мин үҙемде йыйылған күҙәтеү торбаһы һымаҡ тоям! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Алиса.

Был дөрөҫ ине: ул ун дюйм оҙонлоғонда ғына булып ҡалды.

— Хәҙер мин бәләкәс ишектән дә инә алырмын, — тип шатланды ул. Әммә шунда уҡ:

— Тағы саҡ ҡына кәмеһәм, бөтөнләй юғалып ҡуйырмын, — тип уйланы.— Шәм һымаҡ бөтһәм янып, минән тағы ни ҡалыр?

Ул янып бөткән шәмдең утын күҙ алдына килтерергә тырышты, ләкин иҫенә төшөрә алманы.

Башҡаса бәләкәсәймәүенә ышанғас, Алиса баҡсаға сығырға ашыҡты. Бахыр! Шешә менән булашҡан ваҡытта, ул асҡысты өҫтәл өҫтөнә һалып, шунда онотҡан бит! Өҫтәл янына килеп, башын күтәреп ҡараһа, быяла аша алтын асҡыс яҡшы күренә, тик хәҙер Алисаның уны үрелеп алырлыҡ буйы юҡ. Өҫтәл тояғынан менеп ҡарарға маташ-

ты, ләкин быяла тайғаҡ булғас, бер ни ҙә килеп сыҡманы. Аптырағас, Алиса иҙәнгә ултырып иларға тотондо.

— Ярай, етте, тим! — Үҙенә шулай тип бойорҙо ул. — Һиңә хәҙер үк туҡтарға кәңәш бирәм!

Алиса үҙен бик тыңламаһа ла, йыш ҡына арыу кәңәш бирә торғайны. Ҡайһы берҙә үҙен әрләп ташлағаны ла булды. Ул ике ҡыҙ булып ҡыланырға ярата торғайны.

«Ләкин был әле мөмкин түгел! Бер кешелек тә юҡмын бит!» — тип уйланы Алиса.

Ҡапыл ул өҫтәл аҫтында бәләкәс быяла ҡумта күреп ҡалды. Ҡумта эсендә — күмәс. Күмәстең өҫтөнә мәк менән матур итеп: «Мине ашап ҡуй!» — тип яҙылған.

— Ярар, рәхмәт, ашармын. Үҫһәм — асҡысты алырмын, бәләкәсәйһәм — ишек аҫтынан ғына шыуышып үтермен. Нисек булһа ла баҡсаға инергә кәрәк!

Ул күмәсте тешләп ҡараны.

«Бәләкәсәйәмме, үҫәмме?» — тип борсолоп уйланы ул. Быны белер өсөн, ҡулын башының түбәһенә һалды. Ләкин ул ни эшләптер бер ҙә үҙгәрмәне. Хәйер, күмәс ашағандан ни булһын?! Бөтөнөһө элеккесә ҡалғас, Алисаға күңелһеҙ булып китте. Шуға ҡарамаҫтан, ул күмәсте ашап ҡуйҙы.



## Икенсе бүлек

# КҮҘ ЙӘШЕ КҮЛЕ

— Ғәләп-же-нән дә ғәләп-же-рәк! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Алиса. Аптырауынан ул нисек һөйләшергә кәрәклеген дә онотҡайны. — Хәҙер мин күҙәтеү торбаһы кеүек асыла башланым! Хушығыҙ, аяҡтарым!

Аяҡтарына ҡараны — улар әллә ҡайҙа аҫта тороп ҡалды. Бер аҙҙан бөтөнләй күҙҙән юғалдылар.

— Минең бахыр аяҡтарым! Кем һеҙҙе кейендерер икән? Кем ойоҡ менән туфли кейҙерер икән? Мин хәҙер йыраҡ булғас, һеҙҙе ҡайғырта алмам... Минһеҙ йәшәргә тура килер.

Әҙерәк уйлап торғас, ул:

— Шулай ҙа аяҡтарым менән дуҫлыҡта йәшәргә кәрәк. Мин теләмәгән яҡҡа алып китеп бармаһындар. Яңы йылға мин уларға яңы итек бүләк итеп ебәрермен, — тип әйтте.

Алиса план ҡора башланы. «Берәй йомошсо менән ебәрергә тура килер инде! Үҙ аяҡтарыма бүләк! Бына ҡыҙыҡ! Адресы нисек була һуң?

*Иҙән,*
*камин янында ятҡан Балаҫ,*
*Уң аяҡ апайға —*
*сәләм менән*
*Алисанан.*

Уф, ниндәй буш уй килә башҡа!»

Алиса башы менән түбәгә бәрелде. Туғыҙ футҡа яҡын үҫеп өлгөрҙө ул.

Өҫтәлдән асҡысты алып, ишек янына йүгерҙе.

Бахыр Алиса! Шундай ҙур башың менән, был бәләкәс кенә ишектән нисек инерһең инде?

Алиса иҙәнгә ятып бер күҙе менән генә һоҡланғыс баҡсаны күрә алды. Унда инергә бер өмөтө лә ҡалмағас, ул йәнә иҙәнгә ултырып иларға тотондо.

— Оялыр инең! Шундай ҙур ҡыҙыҡай — ә үҙе илай! Хәҙер үк туҡта тим! Ишетәһеңме?

Йәштәр гөрләүектәй туҡтауһыҙ аҡты. Күп тә үтмәне, Алисаның тирә-яғында ҙур булмаған күләүек йыйылды. Һыу бүлмәнең уртаһына етте.

Әҙерәк торғас, әллә ҡайҙан, йыраҡтан, бәләкәс аяҡтарҙың тыпылдауы ишетелде. Алиса тиҙ генә күҙен һөртөп көтә башланы.

Аҡ Ҡуян кире йүгереп килә икән. Ул ҡунаҡҡа барғандай матур кейенгән, бер ҡулына — яңы бирсәткә, икенсеһенә ҙур елпеүес тотҡан.

Аҡ Ҡуян мыйыҡ аҫтынан ғына:



— Аһ, Герцогиня асыуланыр инде! Һуңға ҡалдым бит! — тип шыбырҙап йүгерҙе.

Алиса ҡайғыһынан, ярҙам һорап, кемгә булһа ла өндәшергә әҙер ине. Аҡ Ҡуян уның аяҡтары эргәһенән үткәндә Алиса уға:

— Ғәфү итегеҙ мине, сэр, — тип өндәште.

Ҡуян ҡурҡышынан бирсәткәһе менән елпеүесен ташлап күҙҙән юғалды. Алиса ул ташлаған әйберҙәрҙе эйелеп алды. Бүлмәлә эҫе булғанға күрә, елпеүес менән елпенә башланы.

— Бөгөн ниндәй ғәжәп көн! Ә кисәге көн ғәҙәттәгесә үтте. Бәлки, мин төндә үҙгәргәнмендер? Туҡтағыҙ әле, иҫемә төшөрәйем: бөгөн иртән уянғанда мин мин инемме, әллә мин түгелме? Мин түгел инем, ахырыһы. Кем икән мин хәҙер, былай булғас? Бөтәһе лә шундай буталсыҡ...

Алиса үҙенә йәштәш таныш ҡыҙҙарҙы иҫенә төшөрҙө.

— Шуларҙың берәйһенә әйләнмәгәнменме икән? Һәр хәлдә, мин Ада түгел! Уның сәсе бөҙрә, ә минеке — юҡ! Әлбиттә, мин Мейбл да түгел! Мин шундай күп нәмәләр беләм, ә ул наҙан ҡыҙыҡай. Ғөмүмән, мин — мин булам, ә ул — ул. Бер ни аңлашылмай!

Әйҙә әле, ҡабатлау таблицаһын тикшереп ҡарайым. Тимәк: дүрт бишең — ун ике, дүрт алтың — ун өс, дүрт етең... Юҡ, мин былай егермегә тиклем бер ҡасан да етә алмам! Эй, ярай, ҡабатлау таблицаһы мөһим түгел!

Географияны тикшереп ҡарайым әле: Лондон — Париждың баш ҡалаһы, Париж — Римдың баш ҡалаһы, ә Рим — ...Юҡ, дөрөҫ түгел, шикелле. Ысынлап та, Мейблға әйләнгәнмен икән... «Ҡар сәскәләр» шиғырын уҡып ҡарайым әле.

Ул, дәрестә яуап биргән һымаҡ, ҡулдарын тубығына һалып һөйләй башланы. Ләкин ни эшләптер ят тауыш бөтөнләй икенсе шиғыр уҡыны:

*Аҡ себендәр, аҡ себендәр,*
*Ҡайҙа үҫтеләр икән?*
*Ҡайҙа үҫеп, һимерешеп,*
*Һауаға осолар икән?*

*Аҡ себендәр, аҡ себендәр,*
*Яҙҙар килгәс, юғалыр.*
*Аллы-гөллө сәскәләрҙә*
*Уларҙың һыны ҡалыр.*

— Һүҙҙәре икенсе һымаҡ, — Алисаның күҙенә йәш эркелде. — Тимәк, мин Мейбл икән! Уларҙың бәләкәй өйҙәрендә йәшәргә тура килер инде. Уйынсыҡтарым да булмаҫ. Көнө-төнө дәрес әҙерләп кенә ултырырмын. Ярай, аңлашылды, мин — Мейбл. Тик мин был ҡойонан бер ҡасан да сыҡмайым! Бөтөн ғүмергә ошонда ҡалам! Әйҙә, мине алырға тип килеп ҡараһындар! Иң тәүҙә, минең кем икәнемде әйтегеҙ, оҡшаһа ғына сығам, юғиһә, икенсе ҡыҙға әйләнгәнсе, ошонда тороп ҡалам, тип әйтермен.

Ҡапыл Алисаның күңеле һүрелде.

— Ни эшләп минең арттан һаман береһе лә килмәй? Яңғыҙ булыу ялҡытты!

Алиса аҫҡа ҡараны: һөйләнә торғас, ҡулына ҡуяндың бәләкәс бирсәткәһен кейгән дә баһа!

«Был нисек килеп сыҡты һуң? — тип аптыраны Алиса. — Әллә тағы бәләкәйләнәм?»

Ул, буйының ни сама булғанын белер өсөн, өҫтәл янына килде. Тәү ҡарауға ул ике футҡа яҡын ине, ләкин минут һайын бәләкәсәйә бара. Елпеүесе шулай бәләкәйләтә икәнен аңлағас, Алиса уны иҙәнгә ташланы. Ярай әле ташлап өлгөрҙө, юғиһә бөтөнләй юҡҡа сығыр ине.

— Уф! Көскә ҡотолдом! — тип шатланды ул. — Хәҙер, тиҙерәк баҡсаға!

Алиса ишек янына йүгерҙе. Аһ! Ишек бикле тора, ә алтын аҫҡыс ятҡан урынында ята бирә.

«Эш насар! Насарырағын уйлап та сығара алмаҫһың...» Бына Алиса «суп» итеп һыуға барып төштө. Һыу тоҙлораҡ ине, ул Алисаның эйәгенә тиклем етте.

Алиса тәүҙә бер нисек диңгеҙгә барып төштөм, ахырыһы, тип уйланы. Улай булһа, тимер юл менән ҡайтып китергә була.

Алисаның ғүмерендә бер тапҡыр ғына диңгеҙ күргәне бар. Шуға күрә бөтә диңгеҙҙәр бер иш тип уйлай: һыуҙа

йөҙөп йөрөйҙәр, яр буйында балалар ҡом менән уйнай, арыраҡ ял итеү өсөн өйҙәр, ә уларҙың артында — станция.

Ләкин тиҙҙән Алиса бая үҙе ҙур сағында илаған күҙ йәштәре күленә килеп төшкәнен аңланы.

«Эх, ниңә мин илағанмын! Күҙ йәшендә батып үлеүе — ниндәй йүләрлек! Шул кәрәк миңә! Көнөмә күрә— күле! Был бик сәйер булыр ине! Хәйер, бөгөн бөтәһе лә сәйер»,— тип йәш күлендә йөҙә-йөҙә уйланы Алиса.

Йыраҡтараҡ кемдер сапылданы. Алиса шул яҡҡа табан йөҙҙө. Тәүҙә ул, ҙур һоро йәнлекте күргәс, ҡурҡып китте. Был морж йә гиппопотамдыр, тип уйланы ул, ләкин үҙенең хәҙер ниндәй бәләкәс икәнен иҫенә төшөрөп, яҡыныраҡ барып ҡарарға баҙнат итте. Ҡурҡыныс ҙур йәнлек ни бары һыуға төшкән сысҡан булып сыҡты.

— Өндәшеп ҡарайыммы? — тип уйланы Алиса. — Бөгөн бөтә нәмә шундай ғәжәп, бәлки сысҡан да һөйләшә беләлер? Йөҙөп йөрөгәнсе — өндәшеп ҡал!

Алиса һүҙен бына нисек башланы:

— О, Сысҡан! Һеҙ был күлдән нисек сығыу әмәлен белмәйһегеҙме? Йөҙөп йөрөү шундай арытты, о, Сысҡан!

Алисаның сысҡандар менән һөйләшеүҙә бер ниндәй ҙә тәжрибәһе юҡ ине, ләкин ул ағаһының латин грамматикаһы дәреслеген иҫенә төшөрҙө.

«Төп килеш — сысҡан,
эйәлек килеш — сысҡандың,
төбәү килеш — сысҡанға,
төшөм килеш — сысҡанды,
саҡырыу килеш — о, сысҡан!»

Сысҡан аптырабыраҡ Алисаға ҡараны ла күҙен ҡыҫты (Алисаға шулай күренде), ләкин яуап бирмәне.

«Бәлки, ул инглизса аңламайҙыр? Француз сысҡаны түгелме икән? Бында Вильгельм Яулаусы менән бергә килеүе ихтимал».

Алиса тарихты белеүе менән ғорурланһа ла, ваҡиғаларҙың ҡасан булғанын әле яҡшы белеп бөтмәгәйне.



— Ou est ma chatte?[1]

Француз теле дәреслегендә был һорау беренсе булып тора ине.

Сыҫкан һыуҙа ырғып китте, бөтә тәне менән дерелдәй башланы.

— Ғәфү итегеҙ! Һеҙ бесәйҙәрҙе яратмағанды онотоп ташлағанмын, — тине Алиса.

— Бесәйҙәрҙе яратмайым, имеш, — тип ҡысҡырҙы Сыҫкан. — Һин минең урында булһаң, яратыр инеңме?

— Юҡтыр, моғайын. — Алиса уны тынысландырырға тырышты.— Зинһар, миңә асыуланмағыҙ! Беҙҙең бесәйебеҙ Динәне күрһәтә алмайым шул! Уның менән танышһағыҙ, донъялағы бөтә бесәйҙәрҙе ярата башлар инегеҙ. Ул шундай мөләйем, тыныс. Мырылдап мейес янында ултыра, — тип тоҙло һыуҙа теләр-теләмәҫ йөҙөп һөйләне Алиса. — Ә йөнө шундай йомшаҡ, һыйпап китмәй булмай. Ә сыҫканды ҡалай оҫта тота ул!.. Аһ, ғәфү итегеҙ! Зинһар, ғәфү итегеҙ!..

Сыҫкандың йөндәре тырпайғас, Алиса уны бик ныҡ рәнйеткәнен аңланы.

— Һеҙгә оҡшамағас, был хаҡта башҡа һөйләшмәйек.

— Һөйләшмә-йек?!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙе Сыҫкан. — Мин һөйләшмәйем дә. Борон замандан уҡ беҙҙең ғаилә бесәйҙәргә нәфрәт белдерә. Тупаҫ, әшәке, ҡәбәхәт мәхлүҡтәр! Ишеткем дә килмәй!

— Ярар, ярар, — Алиса һүҙҙе икенсе яҡҡа бороп ебәрергә тырышты. — Ә... эттәрҙе... һеҙ оҡшатаһығыҙмы?

Сыҫкан өндәшмәне.

---
[1] Ҡайҙа минең бесәйем? фр.

— Беҙҙең күршелә шундай яғымлы көсөк йәшәй! Һеҙҙе таныштырырға кәрәк ине! Бәләкәс терьер. Күҙҙәре йылтырап тора, һоро йөнө йомшаҡ, оҙон! Таяҡ ырғытһаң, шунда уҡ кире килтереп бирә. Килтерә лә, һөйәк һораған булып — кешеләрсә ултыра. Бәләкәс булһа ла, нимәләр генә эшләй белмәй — әйтеп бөтөрөрлөк түгел! Хужаһы, фермер, был бик ҡиммәтле эт, ти! Бер нисә аҙна эсендә тирә-яҡтағы бөтә ҡомаҡтарҙы юҡ иткән, ти. Ә сысҡ... Аһ, ғәфү итегеҙ! Мин тағы ла һеҙҙе асыуландырҙым, шикелле.

Сысҡан, һыуҙа тулҡын күтәреп, Алисанан йыраҡыраҡ йөҙөп китте.

— Сысҡан, зинһар, китмәгеҙ! Бесәй менән эткә күңелегеҙ ятмаһас, мин улар тураһында башҡа бер һүҙ ҙә өндәшмәм! — тип тауышын йомшартып үтенде Алиса.

Быны ишетеү менән, Сысҡан кире боролдо. Йөҙө ағарынып киткәйне. «Асыуынандыр», — тип уйланы Алиса...

— Ярға сығайыҡ та, мин үҙемдең хикәйәмде һөйләрмен. Шунан һин бесәйҙәр менән эттәргә ни эшләп нәфрәт белдергәнемде аңларһың. — Сысҡан быны ҡалтыранған зәғиф тауыш менән әйтте.

Һыуҙан, ысынлап та, сығырға ваҡыт ине. Бәләкәс күләүектә һыуға төшкән төрлө йәнлектәрҙән ҡыҫыҡ була башланы.

Бында Робин-ҡаҙ, Додо-ҡош, Лори-тутыйғош, Эдбөркөткәй һәм башҡа иҫ киткес йән эйәләре бар ине. Алиса һыу ситенә беренсе булып йөҙөп китте, башҡалар уның артынан тартылды.

## Өсөнсө бүлек

# ТҮҢӘРӘК БУЙЛАП ЙҮГЕРЕШЕҮ ҺӘМ ТОТТОРМАҪ ҠОЙРОҠ

Яр буйында йыйылған йәмғиәт күркәм күренмәй ине: ҡоштарҙың ҡанаттары тырпайған, йәнлектәрҙең йөнө һыуланып бөткән. Өҫтәренән шыбырҙап һыу аға. Бөтәһе лә өшөп, көҙөрәйешеп торалар.

Иң тәүҙә нисек кибенергә икәнен уйлашырға кәрәк. Кәңәшләшә башланылар. Күп тә үтмәне, Алиса бөтәһе менән дә танышып өлгөрҙө. Уларҙы ғүмер буйы белгән һымаҡ булды. Хатта Лори-тутыйғош менән әҙерәк бәхәсләшеп тә алды, сөнки тегеһе туҡтауһыҙ:

— Мин һинән олораҡ, шуға күрә бөтәһен дә беләм! — тип ҡабатланы.

Алиса Лориға нисә йәш икәнен һорап күпме ныҡышһа ла, тутыйғош яуап бирергә риза булманы. Шуның менән бәхәс тә бөттө.

Ниһәйәт, барыһы ла ихтирам иткән Сысҡан:

— Ултырышығыҙ! Бөтәгеҙ ҙә ултырығыҙ! Тыңлағыҙ! Мине тыңлаһағыҙ, тиҙ генә йылынырһығыҙ! — тип ҡысҡырҙы.

Сысҡанды уратып ултырыштылар. Һыуланғас шунда уҡ йылынмаһаң, сирләп китеү ихтималлығын Алиса белә ине. Шуға күрә ул, йылынайым тип, Сысҡандан күҙен алманы.

— Кхм-кхм, — тип тамағын ҡырып алды Сысҡан. — Әҙерһегеҙме? Башлайыҡ. Был һеҙҙе тиҙ йылытыр! Тын-

лыҡ! «Вильгельм Яулаусы Рим папаһының фатихаһы менән ҡыҫҡа ваҡыт эсендә көслөләр ҡарамағында мохтажлыҡта йәшәгән һәм үҙ ғүмерендә ғәҙел булмаған юл менән тәхет һәм ерҙәр яулап алыуҙарҙы күргән англосакстарҙы үҙенә буйһондороп алды. Мерсияның графы Эдвин менән Нортумбрияның графы Моркар...»

— Кит инде! — тип ҡалтыранды тутыйғош.

Сыҫҡан, үпкәләп, саманан тыш әҙәплелек менән:

— Ғәфү итегеҙ, һеҙ ниҙер әйткән һымаҡ булдығыҙ? — тип һораны.

— Юҡ, юҡ, — тине тутыйғош, ҡабаланып.

— Яңылыш ишеткәнмендер. Улайһа, дауам итәм. «Мерсияның графы Эдвин менән Нортумбрияның графы Моркар Вильгельм Яулаусыны хуплап сыҡтылар, хатта Кентербери архиепископы Стиганд быны хаҡлы тип тапты...»

— Нимәне тапты ул? — тип һораны Робин-ҡаҙ.

— ...быны тапты. Һин быны тигәнде белмәйһеңме? — тине Сыҫҡан.

— Мин дә белмәһәм! Мин,мәҫәлән, берәй нәмә тапҡанда, ул йә тәлмәрйен, йә селәүсен булып сыға. Архиепископ нимә тапҡан тип һорайым бит!

Сыҫҡан яуап бирмәй, ҡабаланып дауам итте:

— «...быны хаҡлы тип тапты һәм, Эдгар Этелинг менән Вильгельм янына барып, уға таж тәкдим иткән. Тәүҙә Вильгельм үҙен бик тыйнаҡ тота, ләкин уның норман һуғышсыларының битһеҙлеге...» Йә, нисек, йылына башланыңмы? — Сыҫҡан, һүҙен бүлеп, Алисанан һораны.

— Баяғы һымаҡ, һыу аға ла аға.

— Былай булғас,— тип иғлан итте Додо, — мин киләсәктә кисектергеһеҙ саралар ҡабул итеү маҡсатында, йыйылышты ашығыс рәүештә таратыу тураһында резолюция ҡабул итергә тәкдим итәм.

— Айырым-асыҡ һөйләгеҙ! Мин был һүҙҙәрҙең яртыһын да аңламайым! Үҙегеҙ ҙә аңлап етмәйһегеҙҙер, — тип һүҙгә ҡушылды Эд-бөркөткәй. Ул йылмайып бөтәһенә лә ҡараны. Ҡоштар хихылдаша башланы.

— Түңәрәк буйлап йүгерешеү ойошторорға кәрәк, тип

әйтергә иткәйнем, — үпкәләгән тауыш сығарҙы Додо. — Шунда уҡ йылыныр инек!

— Нисек була һуң ул? — тип һораны Алиса.

Был йүгереш уны артыҡ ҡыҙыҡтырмай ине, ләкин Додо бөтәһенә тәрән мәғәнәле ҡарап, һорау көткәндәй, туктап торҙо. Башҡалар шым булғас, Алисаға һорарға тура килде.

— Аңлатып торғансы, күрһәтеү яҡшыраҡ!

Берәй ҡасан, ҡыш көнө өшөһәң, бәлки, һиңә лә был уйынды белеү кәрәк булыр. Шуға күрә Додоның ни эшләгәнен һөйләп бирәм.

Тәүҙә ул ерҙә түңәрәк һыҙып ҡуйҙы. Түңәрәк бик үк йомро килеп сыҡмаһа ла, Додо ҡайғырманы:

— Форманың дөрөҫлөгө мөһим түгел!

Шунан бөтәһен дә тәртипһеҙ түңәрәк буйлап теҙеп ҡуйҙы. Бер ниндәй ҙә команда булманы, кем нисек теләй, шулай йүгерә башланы. Был ярыштың ҡасан, нисек бөтөрөн аңлауы ҡыйын ине. Ярты сәғәткә яҡын ваҡыт үткәс, бөтәһе лә йүгереп арып, әҙерәк йылынып алғас, Додо:

— Йүгереш тамам! — тип ҡысҡырҙы.

Барыһы ла, көскә тын алып, Додоны уратып алдылар ҙа:

— Кем еңде? — тип һорарға тотондолар.

Был һорауға Додо, ныҡлап уйламайынса яуап бирә алмайым, тине. Бөтәһе шымды. Додо бармағын маңлайына терәп (иҫеңдәме, Шекспирҙы, ғәҙәттә, шулай һүрәтләйҙәр?) урынында ҡатып ҡалды.

Әҙерәк уйлап торғас, ул:

— Бөтәһе лә еңде! Бүләктәрҙе лә һәммәгеҙ ҙә ала! — тип иғлан итте.

Барыһы бер тауыштан:

— Бүләктәрҙе кем тарата? — тип һораны.

Додо ҡанаты менән Алисаға төртөп күрһәтте:

— Әлбиттә, ул.

Алисаны уратып алдылар.

— Бүләктәр! Бүләктәр! Бүләктәр тарат! — тип кем уҙарҙан ҡысҡырыша башланылар.

Алиса ҡаушап ҡалды. Ни эшләргә белмәй, ҡулын кеҫәһенә тығып ҡараны. Бәхетенә, унда бер төргәк шәкәрләнгән емеш бар ине. Уларға һыу үтеп өлгөрмәгәйне. Алиса берәр емеш таратып сыҡты. Үҙенә генә етмәй ҡалды.

— Ул да бүләккә лайыҡлы бит,— тине Сысҡан.

— Әлбиттә, — тип эре генә яуап бирҙе Додо. Алисаға әйләнеп ул:

— Һинең тағы берәй нәмәң ҡалманымы?— тип һораны.

— Юҡ, — тип күңелһеҙләнеп өндәште Алиса.— Уймаҡ ҡына бар.

— Бир әле миңә, — тип бойорҙо Додо.

Шунан йәнә Алисаны уратып алдылар. Додо тантаналы рәүештә:

— Бүләк итеп ошо нәфис уймаҡты алыуыңды һорайбыҙ! — тине. Был ҡыҫҡа телмәрҙе кем ҡул сабып, кем ҡанат ҡағып ҡаршы алды. Алисаға был йола бик көлкө булып тойолдо, ләкин бөтәһенең дә сырайында етдилек күргәс, көлөргә ҡыйманы. Ул Додоның телмәренә яуап бирергә бер һүҙ ҙә уйлап таба алманы, рәхмәт йөҙөнән башын эйеп, уймағын алды.

Бүләктәрҙе ашарға тотондолар. Тауыш, ығы-зығы күтәрелде. Ҡоштарҙың ҙурҙары емештәрен шунда уҡ йотоп ебәрҙе, ә бәләкәстәренең емештәре тамаҡтарына торҙо. Беренселәре, беҙ тешләп тә өлгөрмәнек, тип зарлана башланы, ә икенселәренең арҡаларынан ҡаҡҡыларға тура килде. Ашап бөткәс, ултырышып, Сысҡандың хикәйә һөйләүен һоранылар.

— Һеҙ беҙгә... Э менән Б-ға ни эшләп нәфрәт белдереүегеҙ тураһында хикәйә һөйләргә булғайнығыҙ...

Алиса был ике хәрефте, сысҡанды үпкәләтмәҫ өсөн, тауышын баҫыбыраҡ әйтте.

Сысҡан көрһөнөп алды.

— Был бик оҙон хикәйә. Бәләкәс сысҡандың яуыз бесәйгә ҡойроғон тоттормауы тураһында.

Сысҡан хикәйәһен һөйләй башланы. Ул һөйләгән арала Алиса ни эшләптер оҙон, нәҙек сысҡан ҡойроғон күҙ алдына килтерҙе, шуға күрә хикәйә Алисаға бына нисек бу-



лып күренде:

Бесәй әйтте
Сысканға:
— Киттек, тиҙерәк
судҡа, һине, эшем
булмағас, хөкөм
итергә кәрәк.
Сысҡан уға
бирҙе яуап:
— Бындай суд-
ты кем күр-
гән? Минең
бер ғәйебем-
дә юҡ! Әйт-
те Бесәй мы-
рылдап:
Мин үҙем
һине хө-
көм итәм,
үҙем үлем
язаһын
белде-
рәм,
үҙем
һине
үл-
те-
рә-
м
!

Сысҡан, һүҙен бүлеп, Алисаға:

— Һин тыңламайһың бит, — тине.

— Юҡ, мин һеҙҙе иғтибар менән тыңлайым. Һеҙ әле бишенсе уратымға еттегеҙ, шулай бит?

— Буш һүҙ! — тип асыуланды Сысҡан. — Мин быға бүтәнсә түҙә алмайым. Һин мине мыҫҡылларға уйлайһың!

Сысҡан тороп китте.

— Юҡсы, уйымда ла юҡ ине. Хикәйәне һөйләп бөтөгөҙ инде, — тип ҡысҡырҙы Алиса.

Бөтәһе бер тауыштан:

— Китмәгеҙ! — тип һөрәнләне.

Ләкин Сыҫҡан артына әйләнеп тә ҡарамай, йүгереп китергә ашыҡты.

— Беҙҙең янда ҡалмауы бик үкенесле! — тине Лори-тутыйғош.

Ҡарт Медуза ҡыҙын:

— Бына, күрәһеңме, ҡәҙерлем, үҙеңде кеше араһында тоторға өйрәнергә кәрәк! — тип өйрәтте.

— Ауыҙығыҙҙы асмай ғына ултырыр инегеҙ, әсәй, — тип йәне көйөп яуап бирҙе йәш Медуза. — Һеҙ ҡусҡарҙы ла ҡабырсағынан сығарырһығыҙ!

— Бында беҙҙең Динә кәрәк ине! — тип ҡысҡырҙы Алиса.— Ул сысҡанды һә тигәнсе кире алып килер ине!

Лори ҡыҙыҡһыныуы белдерҙе:

— Ә кем ул — Динә?

Алиса үҙенең яратҡан бесәйе тураһында һәр ваҡыт һөйләшергә әҙер ине.

— Динә — беҙҙең бесәйебеҙ. Сысҡандарҙы иҫ киткес шәп тотҡанын белһәгеҙ! Ә ҡоштарҙы — тота ла, һөйәктәрен дә ҡалдырмай, йота ла ҡуя!

Алисаның был һүҙҙәре йыйылғандарҙа тәрән тәьҫир ҡалдырҙы. Ҡоштар өйҙәренә ҡайтырға ашыҡты. Ҡарт һайыҫҡан шәленә төрөнөп:

— Ҡайтайым әле, төнгө һауа тамағыма зарарлы булыр,— тине.

Турғай балаларын йыя башланы:

— Өйгә, өйгә, йоҡларға ваҡыт!

Тиҙҙән бөтәһе лә, төрлө һылтау табып, таралышып бөттө. Алиса бер үҙе ҡалды.

«Динә тураһында юҡҡа һөйләгәнмен! Береһенә лә оҡшамай ул бында! Ә донъяла унан да яҡшыраҡ бесәй юҡ бит! Эх, Динә, аҡыллым! Һине күрер көндәрем бармы икән?»

Алиса илап ебәрҙе — уға бик яманһыу булып китте.

Күп тә үтмәй, еңел баҫып атлаған аяҡ тауышы ишетелде. Алиса әйләнеп ҡараны. Бәлки, хикәйәһен һөйләп бөтөрәйем тип, Сысҡан киләлер?

## Дүртенсе бүлек

# КЕҪӘРТКЕ БИЛ ТОРБАНАН ОСОП СЫҒА

Ләкин был Аҡ Ҡуян ине. Нимәлер эҙләгәндәй, ул алан-йолан ҡаранып йүгерә. Алиса уның үҙ алдына мығырҙағанын ишетеп ҡалды:

— Эх, Герцогиня, Герцогиня! Бөттө минең ҡолағым, ҡалманы мыйығым! Башымды киҫеп ташлай ул! Ҡайҙа юғалтҡанмын икән мин уларҙы?

Елпеүес менән бирсәткәһен эҙләгәнен Алиса шунда уҡ аңланы. Ярҙам итәйем тип, эҙләшә башланы. Ләкин әйберҙәр бер ҡайҙа ла күренмәне.

Тирә-яҡ танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Ҙур бүлмә менән быяла өҫтәл дә күҙҙән юғалды.

Аҡ Ҡуян Алисаны күреп ҡалды:

— Эй, Мэри-Энн, һин бында ни эшләп йөрөйһөң? Бар әле, миңә өйҙән яңы бирсәткә менән елпеүес килтер! Йәһәт кенә бул!

Алиса, ҡаушап ҡалып, ҡуянды дөрөҫләп тә тормай, йомош үтәргә шәп итеп йүгереп китте.

«Ул мине үҙенең хеҙмәтсеһе менән бутағандыр. Барыбер, бирсәткәһен табып бирәйем инде».

Алиса бөхтә, ыҡсым ғына бәләкәс өй күреп ҡалды. Ишегенә ялтыр хәрефтәр менән «А. Ҡуян» тип яҙылған. Алиса ишекте асып, баҫҡыстан икенсе ҡатҡа йүгереп менде.

«Ысын Мэри-Эннды осратып ҡына ҡуймаһам ярар

ине». Ул бит, һорап та тормайынса, өйҙән ҡыуып сығарыр ине лә, Алиса Аҡ Ҡуяндың йомошон үтәй алмаҫ ине.

«Ҡуян миңә йомош ҡуша! Бына ҡыҙыҡ! Былай булһа, бесәйем Динә лә йомош ҡуша башлар».

Алиса ошо ғәжәп хәлде күҙ алдына килтерергә тырышты.

«Мисс Алиса! Әйҙәгеҙ кейенергә. Урамға сығырға ваҡыт» — тип саҡыра, ти, Алисаны ҡараусы апай.

«Хәҙер, апай! Мин сысҡан ояһын ҡарауыллап ултырам. Динә үҙе килгәнсе, сысҡан ҡасмаһын тип, ҡарап торорға ҡушты». Хәйер, улай ҡыланһа, Динәне өйҙән ҡыуып сығарырҙар ине.

Шулай уйлап, Алиса тап-таҙа бүлмәгә инде. Тәҙрә янында өҫтәл тора, унда елпеүес менән бәләкәс бирсәткә ята. Алиса шуларҙы алып, бүлмәнән сығайым ғына тигәндә, көҙгө янындағы кәштәлә бәләкәс кенә шешә күреп ҡалды. Унда мине эс тип яҙылмаһа ла, Алиса шешәне асып ауыҙына килтерҙе.

«Берәй нәмә эсеп йә ашап ҡуйһам, төрлө ғәжәп хәлгә тарыйым. Был юлы ни булыр икән? Әҙерәк үҫһәм ярар ине. Бәләкәс булыуы шундай ҡыйын».

Алиса эсемлектең яртыһын да эсеп өлгөрмәне, башы менән түбәгә бәрелде. Уға муйынын һындырмаҫ өсөн, эйелергә тура килде. Ул тиҙ генә шешәне урынына ҡуйҙы.

— Әлегә етеп торор! Былай ҙа ишектән сыға алмам. Ниңә генә күп эскәнмен икән!

Ләкин үкенергә һуң ине. Алиса туҡтауһыҙ үҫте лә үҫте. Тубыҡланып тороу ҙа ҡотҡарманы. Иҙәнгә ятып бер ҡулына терһәкләнде, ҡулы хатта ишеккә тейҙе, ә икенсеһе менән башын ҡосаҡлап алды. Бер минут та үтмәне, Алисаға йәнә тығыҙ була башланы. Бер ҡулын тәҙрәнән сығарып, аяғын мейестең төтөн юлына тығырға тура килде.

Бүтән үҫергә урын ҡалманы.

— Ни булһа ла булыр! Мин башҡа бер ни ҙә эшләй алмайым! Инде тағы нимә көтә икән?

Бәхеткә ҡаршы, шуның менән тылсымлы эсемлектең тәьҫире бөттө. Ләкин Алиса бер еңеллек тә тойманы. Ҡотолоуға өмөт ҡалмағас, күңелһеҙләнеп китте.



«Өйҙә ҡалай рәхәт ине! — тип уйлап ята Алиса. — Унда минең буйым һәр ваҡыт бер төрлө ине! Сысҡан менән ҡуяндарға буйһоноп тормайһың! Ни эшләп мин ҡуян ояһына тығылдым икән? Әммә ләкин... Ләкин... ни тиһәң дә, быйдай тормош миңә оҡшай! Бөтәһе лә шундай ғәжәп!

Элек әкиәт уҡығанда, бындай хәл булғанына ышанмай инем, ә хәҙер үҙем ошондайға килеп эләктем. Минең хаҡта ҙур, яҡшы китап яҙырға кәрәк ине. Бына үҫкәс, яҙырмын...»

Алиса туҡтап торҙо:

«Ләкин, мин үҫтем бит инде... Нисек булһа ла, бында миңә артабан үҫергә урын юҡ».

«Әгәр ҙә бөтөнләй үҫмәһәм — ни булыр икән? Ул саҡта, бәлки, яҡшыраҡ та булыр, ҡартаймаҫмын да! Тик ғүмер буйы дәрес әҙерләргә тура килер. Юҡ, кәрәкмәй!»

«Аһ, ниндәй аҡылһыҙ һин, Алиса! — тип үҙ-үҙенә ҡаршы төштө ул. — Бында нисек дәрес әҙерләп була? Әле

үҙенә сак-сак урын етә... Дәреслектәреңде кайҙа һалырһың?»

Шулай тип Алиса үҙе менән бәхәсләште. Бәхәс бик ҡыҙыҡлы килеп сыкты. Тышта тауыш ишетелгәс, ул, шымып, тыңлап торҙо.

— Мэри-Энн, Мэри-Энн! — тип кыскыра тауыш. — Бирсәткәмде килтер әле! Йәһәт бул!

Баҫкыста бәләкәс аяктарҙың тыпылдағаны ишетелде. Ак Куяндың үҙен эҙләгәнен аңлаға, Алиса, хәҙер унан мең тапкырға ҙурырак булыуына карамаҫтан, өйҙө тетрәтеп дерелдәй башланы.

Куян ишек янына килеп туктаны. Этеп караны. Ишек эс якка асылғас, Алиса уны терһәге менән терәп торҙо — ишек бирешмәне. Алиса Куяндың:

— Ярай, өйҙө урап, тәҙрәнән инермен, — тигәнен ишетеп калды.

«Юк, инде!» — тип уйланы Алиса. Тәҙрә янына килеп етеү вакытын иҫәпләп, ул кулын һуҙҙы ла Куянды тотоп караны.

Кыскырыу ишетелде, нимәлер ауҙы, ватылған быяла сылтыраны. Күрәһең, Ак Куян үҙенең кыяр үҫтергән йылыткысына барып төшкән. Шунан асыулы кыскырыу ишетелде:

— Пат! Пат! Һин кайҙа булдың?

Икенсе тауыш:

— Мин бында! Алма каҙыған булам, ғали йәнәп! — тип яуап бирҙе.

— Алма каҙам, имеш! Тапкан вакыт! — тип асыуланды Куян. — Миңә бынан сығырға ярҙам ит әле!

Тағы ла быяла сылтыраны.

— Әйт әле, Пат, анау тәҙрәлә нимә ул?

— Кул, әлбиттә, ғали йәнәп!

Һуңғы ике һүҙҙе ул бер итеп әйтә — «ғалнәп» тип килеп сыға.

— Аңра, ниндәй кул булһын, ти! Һин берәй касан шундай кулды күргәнең бармы? Тәҙрәгә лә һыймай!

— Шулай ҙа бит, ғалнәп! Ләкин был — кул!

— Нисек булһа ла, минең тәҙрә унының урыны түгел! Бар ҙа алып ташла, Пат!

Тынлыҡ урынлашты. Алиса шыбырҙаған һүҙҙәрҙе көскә аңланы:

— Ғалнәп, күңелем тартмай... Кәрәкмәйҙер, ғалнәп!

— Ҡурҡаҡ! Әйткәнде эшлә!

Алиса бармаҡтарын йәнә һауала ҡыбырҙатты. Был юлы ике тауыштың ҡысҡырыуы ишетелде. Тағы ла быяла сылтыраны.

«Ниндәй ҙур уларҙың йылытҡыстары! — тип уйлап ҡуйҙы Алиса. — Хәҙер ни эшләрҙәр икән? «Алып ташла уны, Пат!» имеш. Сыға алһам, мин үҙем дә сығыр инем. Ярҙам итһәләр ярар ине!»

Бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Тиҙҙән тәгәрмәс шығырҙауы менән күмәк тауыш геүләүе ишетелде. Бер-береһенең һүҙен бүлә-бүлә, бөтәһе бер юлы ҡысҡырыша:

— Икенсе баҫҡыс ҡайҙа?

— Мин береһен генә алып килдем. Икенсеһен Бәләкәс Бил алып килергә тейеш!

— Эй, Бил, бында килтер!

— Был яҡ мөйөшөнән ҡуйығыҙ!

— Икеһен ҡуша бәйләргә кәрәк! Улар уртаға ла етмәй!

— Етер, ҡурҡма!

— Эй, Бил! Бауҙы тот!

— Өй ҡыйығы емерелмәҫме?

— Ипле! Түбә ҡойолоп төшөргә тора...

— Төшә! Төшә!

— Ҡасығыҙ!

Шатырҙау ишетелде.

— Бына һиңә кәрәк булһа! Кем ғәйепле?

— Кем булһын, Бил инде!

— Торбаға кем менә?

— Мин менмәйем! Үҙең мен!

— Юҡ, мин түгел!

— Бил менһен әйҙә!

— Эй, Бил, ишеттеңме? Хужа һиңә менергә ҡуша!

— Бына нисек булып бөттө! — тип уйланы Алиса. — Бөтә нәмәне Билгә япһаралар! Әле унын урынында бу-



лырға теләмәç инем мин. Мейес бында бик ҙур түгел, яҡшы һелтәнеп булмаç, ләкин тибеп ебәрергә булдыра алырмын тип уйлайым!

Алиса, аяғын мейес ауыҙынан төпкәрәк тығып, көтә башланы.

Ниһәйәт, өçтә кемдеңдер ҡыштырҙағаны ишетелде (ниндәй йәнлек икәнен Алиса аңлай алманы).

— Бына, Бил! — тине лә бар көсөнә тибеп ебәрҙе. — Хәҙер ни булыр икән, ҡыҙыҡ!

Тәүҙә бөтәһенең:

— Бил, Бил! Ана, Бил осоп бара! — тип ҡысҡырғаны ишетелде.

Шунан Ҡуян тауышы:

— Эй, ҡыуаҡ янындағылар! Тотоп алығыҙ шуны! — тип һөрәнләне.

Йәнә тынлыҡ, унан йәнә борсоулы тауыштар:

— Башын, башын тотоғоҙ!

— Һыу ҡойоғоҙ өçтөнә!

— Йә, нисек, иçеңә килдеңме, иптәш?

— Нимә булды ул, һөйлә!

Нәҙек, ҡалтыраған тауыш ишетелде. «Был Билдең үҙе була», — тип уйланы Алиса.

— Үҙем дә белмәйем... Рәхмәт, бүтән кәрәкмәй. Миңә еңелерәк... Иçемде йыя алмай торам. Аçтан ниҙер бәреп ебәрҙе лә — мин һауаға атылып сыҡтым!

— Өйҙө яндырырға кәрәк! — тине ҡапыл Ҡуян.

Алиса йән көсөнә:

— Яндырып ҡына ҡарағыҙ, мин һеҙгә Динәне һөстөрәм! — тип ҡысҡырҙы.

Шунда уҡ кәбер тынлығы урынлашты.«Хәҙер ни эшләрҙәр икән? Баштары етһә, өй ҡыйығын алып ташларҙар ине».

Бер аҙҙан хәрәкәт башланды.

Алиса Ҡуяндың:

— Башлап ебәрергә бер арба ла етеп торор! — тигәнен ишетте.

«Нимә бер арба?» — тип уйланы ул.

Аптырауы оҙаҡҡа барманы. Тәҙрәгә ваҡ-ваҡ таштар яуа башланы. Ҡайһы берәүҙәре Алисаның битенә тейҙе.

— Хәҙер үк туҡтағыҙ! Насар булыр!

Йәнә ҡәбер тынлығы.

Шул ваҡыт Алиса таштарҙың иҙәнгә тейеп күмәскә әйләнгәнен күреп ҡалды. «Ашаһам, нимә булыр икән? Үҫергә урын юҡ инде, моғайын, бәләкәсәйермен!» — тип уйланы.

Алиса күмәстәрҙең береһен ашап ҡараны. Шатланып, буйының кәмеүен һиҙҙе. Ишеккә һыйырлыҡ хәлгә еткәс тә өйҙән йүгереп сыҡты. Ихатала ул төрлө-төрлө йән эйәләре төркөмөн күрҙе. Уртала, билен тотоп, бахыр кеҫәртке Бил ята, ике диңгеҙ суҫҡаһы уға һыу эсерә. Алисаны күреү менән бөтәһе лә уны тоторға ташланды, ләкин ул урманға табан һыпыртты.

Әҙме-күпме йүгергәс, Алиса ҡара урманға барып эләкте.





3-8947



— Беренсенән, үҙ буйыма инергә кәрәк, икенсенән, теге матур баҡсаға юл табырға. — Ботаҡтарҙы йырып сыҡҡанда шулай тип һөйләнде ул. — Тап шулай эшләйем — яҡшыраҡ план уйлап та табып булмаҫ!

Ысынлап та, ниәт бына тигән шәп ине — ябай ҙа, аңлайышлы ла. Бер нәмәһе генә насар: Алиса уны нисек ғәмәлгә ашырырға бөтөнләй белмәй. Ул тирә-яғын байҡап сыҡты. Ҡапыл өҫтә кемдер ныҡ итеп сәңк итте. Алиса терт итеп ҡалды ла башын күтәрҙе.

Ғәйәт дәү көсөк ҙур, йомро күҙҙәре менән Алисаға текләп, тәпәйен һуҙып тора.

— Ба-хыр-ҡай, бә-лә-кәй! — тип ялағайланып әйткән булды Алиса. Һыҙғырып та ҡараны, ләкин ирендәре ҡалтырағас, килеп сыҡманы. Етмәһә, көсөк асыҡҡан булһа? Нисек кенә ялағайланма, ашар ҙа ҡуйыр!

Алиса, ни эшләгәнен дә белмәй, ерҙән таяҡ алып көсөккә һуҙҙы. Көсөк, шатлығынан сыйылдап, дүрт аяҡлап һауаға ырғыны ла, таяҡты алды.

Көсөк уны тапап ҡуймаһын тип, Алиса шайтан таяғы артына боҫто. Бер аҙ торғас, башын сығарып ҡарарға баҙнат итте: көсөк йәнә таяҡҡа ташланды ла, яңылыш баҫып, мәтәлләп китте.

«Уның менән уйнау — йөк аты менән уйнаған кеүек — тапап та ҡуйыуы ихтимал».

Алиса тағы шайтан таяғы артына йәшенде. Көсөк һаман таяғынан айырыла алманы: йырағыраҡ ташлай ҙа, өрөп өҫтөнә ырғый, шунан артҡа сигенеп китә. Уйнап туйғас, көсөк, ғәйәт ҙур күҙҙәрен йома биреп, телен һәлендереп ултырҙы.

Тайырға ваҡыт ине. Алиса арып йығыла яҙғансы, артына ла әйләнеп ҡарамай, йүгерҙе лә йүгерҙе. Көсөктөң сәңкелдәүе ишетелмәй башлағас ҡына туҡтап, миләүшә сәскәһенең һабағына терәлеп, япрағын елпеп тын алды.

— Ә көсөк шундай шәп! — тине Алиса уйсан ғына. — Мин уны төрлө һөнәргә өйрәтер инем, әҙерәк... әҙерәк ҙурыраҡ булһам инде! Әйткәндәй, әҙерәк үҫергә кәрәк бит, саҡ онотманым! Нисек эшләнә ул, иҫемә төшөрәйем

әле. Хаталанмаһам, берәй нәмә ашарға йәки эсергә кәрәк. Нимә һуң?

Ысынлап та, нимә?

Алиса тирә-яғына ҡаранды, тик яраҡлы бер нәмә лә тапманы. Йырағыраҡта Алисаның үҙе буйлыҡ ҙур бәшмәк үҫеп ултыра. Алиса уны арттан да, аҫтан да, ян-яғынан да ҡарап сыҡты. Йәнә бәшмәктең өҫтөндә берәй нәмә юҡмы икән тип, ул аяҡ осона баҫып үрелеп күҙ һалды: көтмәгәндә ҙур зәңгәр ҡарышлауыҡ менән күҙгә-күҙ осрашты. Тегеһе, бер нимәгә иғтибар итмәй, сурылдатып хурхур һурып ултыра.



## Бишенсе бүлек

# ЗӘҢГӘР ҠАРЫШЛАУЫҠ КӘҢӘШ БИРӘ

Улар бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә бер-береһенә оҙаҡ ҡына текәлеп торҙо.

Ниһәйәт, Ҡарышлауыҡ хурхурын ауыҙынан сығарып, теләр-теләмәҫ кенә:

— Һин... кем... булаһың? — тип һораны.

— Әле мин үҙемдең кем икәнен белмәйем. Иртән уянғанда белә инем, ул ваҡыттан бирле бер нисә тапҡыр үҙгәреп өлгөрҙөм.

— Нимә уйлап сығараһың? — тип ҡаты ғына һораны Ҡарышлауыҡ. — Үҙ аҡылыңдамы һин?

— Белмәйем, бәлки кешенекендәлер... Күрәһегеҙме...

— Күрмәйем, — тип ҡаршылашты Ҡарышлауыҡ.

— Бөтәһен дә аңлата алмам тип ҡурҡам. — Алиса ипле генә итеп һүҙен дауам итте. — Мин үҙем дә бер ни аңламайым. Бер көн эсендә шундай мөғжизәләр теләһә кемде аптыратыр.

— Аптыратмаҫ! — тип тағы ҡаршы төштө Ҡарышлауыҡ.

— Нисек аңлатайым икән? Бына һеҙ, мәҫәлән, күп тә үтмәй тәүҙә ҡурсаҡҡа, ә һуңынан — күбәләккә әйләнерһегеҙ. Былар һеҙгә сәйер булып тойолор.

— Һис тә тойолмаҫ!

Түҙемлеген юғалтмаҫҡа тырышып, Алиса дауам итте:

— Һеҙгә, бәлки, тойолмаҫ та, ләкин миңә былар ғәжәп күренер ине.

— Һиңә? — мыҫҡыл итеп һораны Ҡарышлауыҡ. — Ә һин кем?

Был һорау уларҙы әңгәмәнең башына ҡайтарҙы. Һәр һүҙгә ҡаршы төшә торған Ҡарышлауыҡ Алисаны тамам асыуландырҙы. Ул туп-тура баҫып, тауышын оло-ларҙыҡына оҡшатырға тырышып:

— Минеңсә, тәүҙә һеҙ миңә кем икәнегеҙҙе әйтергә тейешһегеҙ, — тине.

— Ни өсөн?



Был һорауға Алиса яуап таба алманы. Ярай, бөгөн Ҡарышлауыҡтың кәйефе юҡтыр, тип уйланы ла китеү яғын ҡараны.

— Туҡтап тор! — тип ҡысҡырҙы Ҡарышлауыҡ.— Минең һиңә әйтер һүҙем бар.

Алисаға был бик серле булып күренде. Ул кире әйләнеп килде.

— Үҙеңде тота бел! — тип ысҡындырҙы Ҡарышлауыҡ.

— Әйтер һүҙегеҙ шул ғынамы?

— Юҡ, — тине Ҡарышлауыҡ, үҙе ҡабаланмай ғына хурхурын һура башланы.

Бүтән бер эше лә булмағас, Алиса көтөп торорға риза ине. Бәлки, Ҡарышлауыҡ берәй мөһим хәбәр әйтеп ҡуйыр?

Ҡарышлауыҡ ләззәтләнеп хурхурын һурып туйғас, күҙен асты ла:

— Тимәк, һин үҙгәрҙем тиһең инде? — тип һораны.

— Эйе, бер оҙонаям, бер ҡыҫҡарам, үҙем һис ни иҫләмәйем.

— Ә нимәне иҫләмәйһең?

— «Ҡар сәскәләр» шиғырын уҡып ҡарағайным, тик дөрөҫ килеп сыҡмай, шикелле.

— Әйҙә әле «Терпе менән шыршы»ны уҡып күрһәт. Был минең иң яратҡан шиғырым.

Алиса күлдәгенең итәктәрен семтеберәк тотто ла сағыу тауыш менән шиғыр һөйләй башланы.

ТАРАҠ МЕНӘН ТЫРМА

*Тараҡ әйтте ҡарт тырмаға:*
*— Ниңә ҡасаһың эштән һин?*
*Кейенгәнһең ағас тештән,*
*Минең бабам түгелме һин?*

*Тырма әйтте:*
*— Ишет туған,*
*Һәр тешле тараҡ булмаҫ.*
*Минең тырмау эшем бар.*
*Тап үҙеңә башҡа иптәш.*

*Тараҡ әйтте:*
*— Һинең һымаҡ*
*Нисек мин дә ҙур үсәйем?*
*Йырлай-йырлай ел көйөнә*
*Һинең менән күрешәйем?*

*Тырма әйтте:*
*— Был донъяла*
*Һәр кемдең үҙ өлөшө бар:*
*Тараҡ кәрәк сәс тарарға,*
*Ә тырманың ер эше бар.*

*Минең һымаҡ үҙ көнөңдө*
*Күрә бир һин тыныс ҡына.*
*Булма, тырма,*
*тараҡса шат,*
*Йәшә, эшлә, сәс тарап.*

— Бына күрәһегеҙме, ҡайһы бер һүҙҙәре икенсерәк һымаҡ.

— Баштан-аяҡ дөрөҫ түгел, — тип уны ҡәтғи итеп туҡтатты Ҡарышлауыҡ. Бер аҙ тып-тын торғас, һорай ҡалды:

— Ә һинең буйға ниндәй булғың килә?

— Миңә барыбер, беләһегеҙме, көнөнә ҡырҡ тапҡыр буйыңды алмаштырһаң, ныҡ ялҡыта.

— Белмәйем шул, — тип ҡаршылашты Ҡарышлауыҡ.

Эстән генә Алиса унға тиклем һанай башланы: үҙ ғүмерендә уға бер кемдең дә былай ҡаршылашҡаны юҡ ине.

— Әлеге буйың һине ҡәнәғәтләндерәме?

— Һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән, минең саҡ ҡына үҫкем килә ине, сөнки өс дюйм шундай уңайһыҙ буй!

— Был бик яҡшы буй! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Ҡарышлауыҡ (ул үҙе тап өс дюйм оҙонлоғо ине).

«Уф, улар бында бөтәһе лә ҡалай үпкәселдәр», — тигән уй үтте Алисаның башынан. Ә тегегә аңлатырға тырышты:

— Мин бит уға өйрәнмәгәнмен.

Ҡарышлауыҡ йәнә хурхурына тотондо.

— Бер аҙҙан өйрәнерһең, — тине лә һауаға ҙур төтөн болото бөрктө.

Алиса Ҡарышлауыҡтың иғтибарын бер нисә минут сабыр ғына көтөп торҙо.

Ҡарышлауыҡ бер-ике иҫнәне лә, наҙланып кирелеп алды. Бәшмәктән шыуышып төшкәс, Алиса менән хушлашыу урынына:

— Бер яҡтан тешләһәң, — үҫерһең, икенсеһенән — бәләкәсәйерһең, — тип үлән араһына инеп юғалды.

«Нимәнең бер яғынан? — тип уйланы Алиса. — Нимәнең икенсе яғынан?»

Ҡарышлауыҡ, Алисаның уйын белгән һымаҡ, йыраҡтан:

— Бәшмәктең, — тип яуап бирҙе.

Алиса бер мәлгә айбанып бәшмәккә ҡарап торҙо. Нисек бының бер яғы менән икенсе яғын айырырға? Алиса тамам аптыраны. Уйлай торғас, ул бәшмәкте ҡосаҡланы ла һәр ике яғынан берәр киҫәк һындырып алды.

«Бына ҡыҙыҡ, был һыныҡтарҙың ҡайһыһы ҡайһы икән?»

Алиса уң ҡулындағы һыныҡты саҡ ҡына тешләп ҡапҡайны, шунда уҡ эйәге менән сыҡ итеп әллә нәмәгә бәрелде. Ҡараһа, эйәге аяҡтарына килеп бәрелгән!

Алиса минут һайын бәләкәсәйеүенә ҡурҡып китте. Был хәлде туҡтатырға кәрәк ине.

Һул ҡулындағы һынығын ауыҙына килтерҙе. Ауыҙы асыла алмай. Башын көскә-көскә аяҡ араһынан айырып, бәшмәк һынығын тешләп алды.

* * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * * *

— Бына, исмаһам, башым ысҡынды! — тип шатланды Алиса. Ләкин шунда уҡ ҡыуанысын борсолоу алмаштырҙы: иңбаштары ҡайҙалыр юғалған.

Аҫҡа ҡараһа, уның сикһеҙ оҙон муйыны ғына йәшел үлән өҫтөндә бағана һымаҡ һерәйеп тора.

— Был ниндәй үлән тағы? Ҡайҙа минең иңбаштарым? Минең бахыр ҡулдарым, һеҙ ҡайҙа?

Алиса ҡулдарын ҡыбырҙатып ҡуйҙы, ләкин бер ни ҙә күренмәне. Ҡайҙалыр аҫта, үлән араһында ғына ҡыш-

тырҙау ишетелде. Алиса, ҡулдарын күтәрә алмағас, башын аҫҡа эйеп ҡарарға булды. Йәтеш, муйыны йылан һымаҡ төрлө яҡҡа рәхәтләнеп бөгөлә. Инде башы менән ағастар араһына сумам ғына тигәндә, ҡурҡыныс ыҫылдау ишетел-



де. Алиса терт итеп ҡалды. Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға, Алатуба ҡошо Алисаның битенә ташланды.

— Йылан! — тип ҡысҡырырға тотондо Алатуба.

— Бер ниндәй ҙә йылан түгелмен! — Алиса ҡошто ҡыуып ҡараны. — Хәҙер үк осоп китегеҙ!

— Ә мин йылан тим! — Тауышын баҫыбыраҡ ҡабатланы Алатуба. — Ни генә эшләп ҡараманым — файҙаһыҙ. Бер нисек тә һаҡланып булмай был яуыздарҙан!

Алиса ҡоштоң һүҙен:

— Мин бер нимә лә аңламайым, — тип бүлдереп ҡараны, ләкин Алатуба, көрһөнөп, һүҙен дауам итте:

— Ағас төптәре, йылға ярҙары, ҡыуаҡтар... Эх, был йылан-саяндар! Бөтә ерҙән эҙләп табалар.

Алиса аптырағандан-аптыраны.

— Балаларҙы сығарыу ғына етмәй, көнө-төнө уларҙы ҡарауыллап торорға кәрәк! Бына өс аҙна инде тынғы юҡ!

Алиса эштең ниҙә икәненә әҙ-мәҙ төшөнә башланы.

— Һеҙҙе шулай борсоуҙары аяныслы икән, — тине ул.

— Инде иң бейек ағасҡа урынлашып, тынысланайым ғына тиһәм, юҡ инде — һауанан төшә башланылар! У-у! Ҡара йылан!

— Мин йылан түгел! Мин бәләкәй генә... бәләкәй...

— Йә, йә, әйтә һал, бәләкәй кем? Йылан? Күренеп тора, берәй нәмә уйлап сығарырға теләйһең.

Алиса, бөгөн нисәмә тапҡыр алмашыныуын иҫенә төшөрөп, үҙ һүҙенән үҙе шикләнеп:

— Мин бәләкәй ҡыҙ, — тип ҡыйыуһыҙ ғына яуап бирҙе.

Алатуба мыҫҡыллы көлөп ебәрҙе:

— Эйе шул, бәләкәс ҡыҙҙарҙы күргәнем бар минең, ләкин үҙ ғүмеремдә ошондай оҙон муйынлы ҡыҙ тураһында ишеткәнем дә юҡ ине. Ып-ысын йылан! Һин тағы: «Минең бер ҡасан да йомортҡа ашағаным юҡ», — тип әйтеп ҡуйма!

Алиса һәр ваҡыт дөрөҫөн генә әйтеп өйрәнгәнгә күрә:

— Йомортҡа ашағаным бар минең, — тине. — Ҡыҙҙар ҙа йомортҡа ашай бит!

— Мин быға ышанмайым.Ләкин һүҙең хаҡ булһа, ҡыҙҙар ҙа шул уҡ йыландар! Бүтән әйтер һүҙем юҡ!

Был һығымта Алисаны бик ныҡ ғәжәпләндерҙе.

Алатуба батырланып китте:

— Һинең йомортҡа эҙләгәнеңде беләм. Ҡыҙмы һин, йыланмы — минең өсөн барыбер!

— Ә минең өсөн барыбер түгел! — тип һүҙ ҡыҫтырырға тырышты Алиса. — Ысынын әйткәндә, мин бөтөнләй йомортҡа эҙләмәйем. Эҙләһәм дә, һеҙҙең йомортҡағыҙ миңә кәрәкмәҫ ине. Мин сей йомортҡа яратмайым!

Алатуба тынысланды:

— Улай булғас, бынан китә һал, — тип йәнә ояһына ултырҙы.

Алиса ергә төшә башланы. Был анһат эш түгел ине: муйыны тота ла ағас ботаҡтары араһында буталып ҡала, туҡтап-туҡтап уны ысҡындырырға тура килә.

Ҡулында һаман да бәшмәк һыныҡтары булыуы иҫенә төшкәс, ул әҙләп-әҙләп тешләргә тотондо. Бер ҙурайып, бер бәләкәсәйеп, үҙ буйына көскә инде ул.

Ысын буйына күнегә төшкәс, Алиса йәнә үҙ-үҙе менән һөйләшә башланы:

— Эштең яртыһы эшләнде! Ниндәй ғәжәп был әйләнеүҙәр! Бер минуттан үҙең менән тағы ни булырын белмәйһең... Әле, исмаһам, буйым үҙемдеке. Теге баҡсаға инеп булмаҫмы икән?

Алиса ыҡсым ғына өй торған аҡланға килеп сыҡты.

«Кем йәшәй икән был өйҙә? Миңә унда барырға ярамаҫ, ҡурҡып бөтөрҙәр».

Ул бәшмәгенең бәләкәсәйтә торған киҫәген тешләп алды ла, туғыҙ дюйм самаһы ҡалғас ҡына, өйгә табан атланы.

## Алтынсы бүлек

# СУСҠА МЕНӘН БОРОС

Өйгә яҡынайғас, Алиса, туҡтап, ҡарап торорға булды. Әҙме-күпме ваҡыт үткәс, урман эсенән уҡалы кейем кейгән хеҙмәтсе йүгереп сыҡты ла ишек ҡаға башланы. (Уның хеҙмәтсе икәнен Алиса уҡалы кейеменән белде, йөҙөнә ҡарағанда инде, был ябай ҡорман балығы.)

Ишекте табаҡ битле, аҡай күҙле икенсе хеҙмәтсе асты. Уныһы тәлмәрйенгә оҡшап тора. Икеһененең дә башында пудраланған, оҙон бөҙөркәләре төшөп торған парик.

Алиса, ни булыр икән тип, ағас артынан боҫоп күҙәтә башланы.

Ҡорман-хеҙмәтсе ҡултыҡ аҫтынан ҙур хат килтереп сығарҙы ла эре ҡиәфәттә тәлмәрйенгә һуҙҙы:

— Герцогиняға. Батшанан. Крокет уйынына саҡырыу.

Тәлмәрйен хатты алып шундай уҡ эре ҡиәфәттә һүҙҙәрҙең урынын алмаштырып ҡына яуап бирҙе:

— Батшанан. Герцогиняға. Крокет уйынына саҡырыу.

Шунан улар сәстәре буталғансы ергә тиклем баш эйеп хушлаштылар.

Алисаның ҡысҡырып көлгөһө килде, тегеләр ишетмәһен тип, ул урман эсенә йүгерҙе; кире әйләнеп килгәндә, Ҡорман-хеҙмәтсе китеп өлгөргәйне инде, ә Тәлмәрйен, ҡарашын һауаға теклэп, өй артында ултыра.

Алиса ҡыйыуһыҙ ғына ишек ҡаҡты:

— Ишекте ҡаҡмаһаң да була, — тип өндәште Тәлмәрйен.— Беренсенән, һинең һымаҡ, мин дә ишектең был


46

яғындамын, икенсенән, эстәгеләр бик нығ шаулаша, һине барыбер береһе лә ишетмәҫ.

Өй, ысынлап та, геү килә: кемдер сырылдай, кемдер сөскөрә, ваҡыты менән, һауыт-һаба ярғандай, ҡолаҡ тондорғос шылтырау ишетелеп ҡала.

— Өйгә нисек инергә? — тип һораны Алиса.

Тәлмәрйен, һорауға яуап бирмәй, һөйләнә бирҙе:

— Арабыҙҙа ишек булһа, һин туҡылдата алыр инең, йә һин эстә булып, ишек шаҡыһаң, мин һине сығарыр инем.

Уның өҙлөкһөҙ күккә ҡарап ултырыуы Алисаға әҙәпһеҙлек булып күренде.

«Бәлки, ул юрамал улай итмәйҙер? — тип уйлап ҡуйҙы Алиса. — Күҙҙәре түбәһендә урынлашҡан да баһа! Мәгәр, нисек булғанда ла, һорауҙарға яуап бирә алыр ине бит инде».

— Өйгә нисек инергә? — тип ҡысҡырып ҡабатланы ул.

— Ултырам да ултырам ошонда. Иртәгәгә тиклем.

Ҡапыл ишек асылды ла, Тәлмәрйендең баш осонан ҙур батмус осоп китте. Тәлмәрйен урынынан да ҡуҙғалманы. Батмус, уның морон осона тейеп, артындағы ағасҡа бәрелеп ярылды,

— ...йәки иртәнән һуңға тиклем, — тине Тәлмәрйен, һис ни булмағандай.

Алиса һорауын тағы ла ҡабатланы:

— Мин өйгә нисек инәйем?

— Инеп торорға кәрәкме икән? Уныһы әле икеле.

Һүҙе дөрөҫ булһа ла, Алисаға оҡшаманы.

«Бәхәсләшергә ҡайһылай ярата был йәнлектәр. Аҡылдан яҙырһың бында».

Тәлмәрйен яңыраҡ әйткән һүҙҙәрен әҙерәк үҙгәртеп ҡабатларға булды:

— Ултырырмын ошонда, көнө-төнө, айҙар буйы...

— Миңә ни эшләргә һуң?

Тәлмәрйен бер ҙә аптырамай:

— Ни теләһәң, шуны эшлә, — тине лә һыҙғырырға керешге. Алиса: «Был аңра менән һөйләшеп торғансы», — тип уйланы ла ишекте асып өйгә инде.



Алғы яҡта өс  аяҡлы ултырғыста Герцогиня бала бәүетеп ултыра, оло мейес янында ашнаҡсы ҙур ҡаҙанда ашын бутап тора ине.

«Был ашҡа бик күп борос һалғандар, — тип Алиса кергәс тә сөскөрә башланы.

Ысынлап та, өйгә борос тулғайны. Ваҡыты менән Герцогиня ла сөскөрөп ала, балаһы иһә туҡтауһыҙ сөскөрә лә ҡысҡыра. Тик ашнаҡсы менән мейес алдында йылмайып ултырған оло бесәйгә генә борос шауҡымы теймәгән һымаҡ.

Беренсе булып һүҙ башлау бик үк әҙәпле булмаһа ла, Алиса, ҡыйыуһыҙ ғына:

— Ә ни эшләп һеҙҙең бесәйегеҙ йылмая? — тип һораны.

— Сөнки был Чешир Бесәйе, — тип яуап бирҙе Герцогиня. Шунда уҡ: — Суҫҡа балаһы! — тип асыуланып ҡысҡырып ебәрҙе.

Алиса терт итеп ҡалды.

Был һүҙҙәрҙең уға түгел, балаға ҡағылғанын аңлағас, һөйләшеүҙе дауам иткән булды:

— Чешир Бесәйҙәре гел йылмая икәнен белмәгәйнем дә. Ғөмүмән, бесәйҙәр йылмая белә тип бөтөнләй уйламағайным.

— Беләләр, бөтәһе лә тиерлек йылмая.

Алиса әңгәмәнең һәүетемсә барыуына ҡыуанып ҡуйҙы.

— Минең береһен дә күргәнем юҡ ине!

— Һин күп нәмәне күрмәгәнһең әле, — тине Герцогиня ҡырыҫ ҡына.

Алиса Герцогиняны асыуландырмай торған бүтән һорау уйлап табырға булды. Шул арала ашнаҡсы ашынан айырылып, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ҡулына нәмә эләгә, шуны Герцогиня менән балаға ташларға тотондо. Сүмесме, тәрилкәме, табаҡмы, тәртешкәме — бөтәһе лә эшкә яраны. Герцогиня, ҡайһы бер нәмә башына тейһә лә, һис ни булмағандай, урынынан ҡуҙғалманы. Бала былай ҙа баянан бирле ҡысҡырып илай ине.

— Иплэп-иплэп, танауына элэктерэһегеҙ, — тип ҡурҡып үтенде Алиса. — Бахыр танау!

Баланың бите эргәһенән ҙур табаҡ осоп үтте.

— Ҡайһы берәүҙәр кеше эшенә ҡыҫылып йөрөмәһә, Ер шары тиҙерәк әйләнер ине, — тине Герцогиня.

— Бынан яҡшы нәмә килеп сыҡмаҫ ине. — Уңайлы ваҡыттан файҙаланып, Алиса үҙ белемен күрһәтергә булды. — Ер шары 24 сәғәттә әйләнеп сыға. Тиҙерәк әйләнһә, көн менән төн буталып, Ай һәм Ҡояш урыны менән алмашыныр ине...

— Ай менән балта, тип әйтергә теләйһеңдер, — тип ҡысҡырып ебәрҙе Герцогиня. — Башын киҫеп ташлағыҙ!

Алиса шомланып ашнаҡсыға ҡараны. Бәхетенә, тегеһе был ишараға иғтибар бирмәйенсә, ашы менән булашты.

Уйланып торғас, Алиса:

— Әллә 24 түгел, 12 сәғәттәме икән? — тип шик белдерҙе.

Герцогиня түҙемлеген юғалтып:

— Йөҙәтмә мине. Мин бер ҡасан да һандар менән килешмәнем, — тине лә балаһын нык итеп һелкетеп бәүетергә тотондо.

*Йоҡла-йоҡла, әй, балам,*
*Бишеккә борос һалам.*
*Һин йоҡоға талғансы*
*Борос һурып ятһаңсы.*

Ҡушымта (уға ашнаҡсы менән бала ҡушылды):

*Ау, ау борослау!*

Герцогиня, икенсе куплетҡа күсте. Ул баланы түбәгә тиклем ырғытты, сабыйҙың аҡырып илауы арҡаһында, Алиса йырҙың һүҙҙәрен көскә аңланы.

*Сеү-сеү, сөскөрмәсе,*
*Борос ҡуҙағын бәрмәсе.*
*Йортом тулы мәшәҡәт,*
*Эшемде ҡалдырмасы.*

Ҡушымта:

*Ау, ау, борослау!*

— Мә, тот, — тип Герцогиня балаһын Алисаға ташланы. — Әҙерәк бәүетеп ал, бик теләгәс. Ә миңә Батшаның уйынына барыу өсөн кейенергә кәрәк.

Ашнаҡсы уның артынан кәстрүл сорғотто, ләкин тейҙерә алманы.

Алиса бәпесте ҡулынан саҡ-саҡ төшөрөп ебәрмәне. Был бала бик сәйер күренә: аяҡ-ҡулдары диңгеҙ йондоҙоноҡолай төрлө яҡҡа тырпайған, үҙе ых та пых килеп, Алисаның ҡулынан төшөргә тыбырсына.

Әҙерәк уйлағас, Алиса уны нисегерәк тоторға икәнен белде: бер ҡулы менән ул баланың уң ҡолағын, ә икенсе ҡулы менән һул аяғын алды ла, төйнәп ҡуйҙы. Ошо уңайлы хәлдә уны өйҙән алып сыҡты.

«Был бахырҙы үҙем менән алып китмәһәм, бер-ике көндән теге икәү уны үлтереп ҡуйыр, — тип уйланы Алиса. — Ҡалдырһам, енәйәт булыр!»

Һуңғы һүҙҙәрҙе ул ҡысҡырып әйтте. Бәпес ризалығын белдереп мырҡылданы (сөскөрөүҙән туҡтағайны инде).

— Мырҡылдама! Фекереңде икенсе төрлө белгетергә тырыш! — тип өйрәтте уны Алиса.

Сабый тағы мырҡылданы.

Алиса уның битенә шикләнеп ҡараны: күтәрелеп киткән танауы тас сусҡа томшоғона оҡшап тора, ә бәләкәс кенә күҙҙәре был оҡшашлыҡты тағы ла нығыраҡ дөрөҫләй.

«Бәлки ул мышҡылдағандыр?» Алиса, бының күҙендә йәш юҡмы икән, тип ҡараны. Йәштең «й» хәрефе лә юҡ ине.

— Беләһеңме, балаҡай, әгәр һин сусҡаға әйләнәм тиһәң, мин һине ҡарамаясаҡмын!

Бәпес тағы ла мышҡылдап ҡуйҙы (әллә мырҡылданымы — әйтеүе ҡыйын!).

Бер нисә аҙым шым барҙылар. Алиса:

«Өйөмә ҡайтҡас, был баланы ни эшләтермен икән? — тип уйлап та өлгөрмәне, бала ҡысҡырып мырҡылдай башланы. Алисаның ҡулында ып-ысын сусҡа балаһы ла баһа! Хәҙер уны ҡулда тотоуҙың кәрәге юҡ ине. Ергә төшөрөү менән сусҡа балаһы ҡыуанып урманға табан тороп сапты.



«Әҙерәк үҫһә, бынан бик тәртипһеҙ бала килеп сығасаҡ. Ә суҫка ҡиәфәтендә бик тә килешле!» Алиса үҙенә таныш балаларҙы иҫенә төшөрҙө: ҡайһы береһенән, нисек үҙгәртергә кәрәклеген белгәндә, бына тигән суҫка килеп сығыр ине!

Шулай уйланып бара торғас, Алиса ағас ботағында ултырған Чешир бесәйен күреп ҡалды.

Бесәй Алисаға йылмайҙы. Бик мөләйем күренһә лә, уның менән шаярырға ярамауын Алиса шунда уҡ һиҙҙе: тырнаҡтары оҙон, теше үткер.

Ул нисек өндәшергә белмәй:

— Бесәй-матурҡай! — тине.

Бесәй бөтә тештәрен күрһәтеп тағы йылмайҙы.

Алиса күңеленән: «Ҡәнәғәт күренә», — тип уйланы ла, ҡысҡырып һораны:

— Миңә ҡайһы яҡҡа барырға икән?

— Ә һин ҡайҙа барырға теләйһең?

— Миңә барыбер...

— Улай булғас, ҡайҙа барһаң да барыбер, — тип нигеҙле яуап бирҙе Бесәй.

— ... берәй ҡайҙа барып сығырға ине.

— Оҙаҡ-оҙаҡ барһаң, берәй ергә берәй ҡасан барып сығырһың әле.

Быға ла ризалашырға тура килде. Алиса һөйләшеүҙе икенсе яҡҡа борҙо:

— Ә бында ниндәй кешеләр йәшәй?

— Ана тегендә, — Бесәй уң ҡулы менән төртөп күрһәтте, — Эшләпә оҫтаһы йәшәй. Ә теге яҡта, — ул һул ҡулын һелтәне, — Май Ҡуяны. Кемгә барһаң да барыбер. Береһе лә үҙ аҡылында түгел.

— Нишләп улай?

— Оҫта, ғүмер буйы эшләпә ҡалыптары менән булашып, тупаҫланып бөткән, шуға һәммәһе лә уны Тупаҫҡай тип йөрөтә. Май Ҡуяны май ҡояшынан тамам аҡылынан яҙған...

— Ниңә миңә ул аҡылһыҙҙар? — тине Алиса.

— Быны үҙгәртеп булмай, бында бөтәһе лә аҡылһыҙҙар: һин дә, мин дә.

— Минең үҙ аҡылымда булмағанды һеҙ ҡайҙан беләһегеҙ?

— Әлбиттә, үҙ аҡылыңда түгелһең. Юғиһә, бында нисек килеп эләгер инең?

Был дәлил Алисаға бер ҙә ышандырғыс булып күренмәне, ләкин ул ҡаршы төшмәне, тағы һорарға булды:

— Ә һеҙ үҙегеҙҙең аҡылһыҙлығығыҙҙы ҡайҙан беләһегеҙ?

— Эттең үҙ аҡылында икәнен беләһеңдер, шунан башлайыҡ.

— Ярай, шулай булһын ти...

— Эт асыуланһа — ырылдай, ә шатланһа — ҡойроғон болғай. Мин, иһә, шатланһам — ырылдайым, асыуланһам — ҡойроҡ болғарға тотонам. Тимәк, мин үҙ аҡылымда түгел.

— Минеңсә, һеҙ ырылдамайһығыҙ, ә мырылдайһығыҙ.

— Нисек әйтһәң дә, асылда барыбер. Һин бөгөн Батша уйынында ҡатнашаһыңмы?

— Бик тә барғым килә, ләкин мине саҡырманылар шул әле.

— Улай булғас, кискә тиклем хуш, — тип Бесәй күҙҙән юғалды.

Алиса быға бер ҙә аптырамаLны, төрлө ғәжәп хәлдәргә өйрәнеп бара ине инде ул. Алиса әле яңыраҡ ҡына бесәй

ултырған ботаҡҡа ҡараны. Бесәй ҡапыл йәнә барлыҡҡа килде.

— Әйткәндәй, баланы нишләттең, тип һорарға инем, — тине ул.

Алиса ҡаушап ҡалманы:

— Ул суҫҡаға әйләнде, — тип яуапланы.

— Шулай булыр тип уйлағайным да!..

Бесәй тағы юғалды. Ҡабат күренмәҫме икән, тип Алиса уны бер аҙ көтөп торҙо ла, теге тамам ғәйеп булғас, Май Ҡуяны йәшәгән тарафҡа йүнәлде. Ул уйлана-уйлана атланы: «Эшләпә оҫталарын күргәнем бар инде, ә Май Ҡуяны, минеңсә, ҡыҙығыраҡ булыр. Әле майҙың аҙағы етте, тимәк, аңына килгәндер әле...»

Күҙен күтәрһә — ботаҡта әлеге лә баяғы Бесәй ултыра.

— Кемгә тинең әле — суҫҡағамы, сысҡанғамы? — тип һораны ул.

— Суҫҡаға, тинем... Ә һеҙ әҙ генә яйыраҡ килеп сығып юғала алмайһығыҙмы? Бөтөнләй башым әйләнеп китте.

— Ярай. — Бесәй ризалашты. Был юлы ул аҡрынлап күҙҙән юғалды. Беренсе булып ҡойроҡ осо, унан үҙе юҡ булды, ә йылмайыуы байтаҡ ваҡыт эленеп торҙо.

«Йылмаймаған бесәйҙәрҙе күп күрергә тура килде, ләкин бесәйһеҙ йылмайыуҙы осратҡаным юҡ ине!» — тип уйланы Алиса.

Бер аҙ атлағас, ул Май Ҡуяныныӊ йортон күреп ҡалды.

Ысынлап, хаталаныу ҡыйын: ҡуян йөнө менән ҡапланған өй ҡыйығынан ҡуян ҡолаҡтарына оҡшатып эшләнгән ике мейес торбаһы сығып тора. Өй ҙур булғас, Алиса һул ҡулына тотҡан бәшмәк һынығын ашап ҡуйҙы. Буйы ике фут самаһы булғас, ул өйгә табан ҡыйыуһыҙ ғына атланы.

«Әгәр ҙә ҡуян ғауғаһы булып сыҡһа? Тупаҫҡайға барырға кәрәк булған!» — тип уйланы ул.

## Етенсе бүлек

# АҠЫЛДАН ЯҘҒАН СӘЙ ТАБЫНЫ

Өй янындағы ағас төбөндә ҙур өҫтәл тора. Өҫтәл артында Май Ҡуяны менән Тупаҫҡай сәй эсеп ултыра. Араларында Йоҡосо Сысҡан йоҡлап ята. Май Ҡуяны менән Тупаҫҡай, мендәр урынына сысҡанға терһәкләнеп, үҙ-ара һөйләшәләр.

«Бахыр Йоҡосо, — тип уйлап ҡуйҙы Алиса.— Бик уңайһыҙҙыр инде уға. Шулай ҙа йоҡлап ята бит әле, тимәк, уға барыбер».

Өҫтәл бик ҙур булһа ла, сәй эсеүселәр уның бер мөйөшөндә генә ҡыҫылып ултыра. Улар Алисаны күреү менән:

— Урын юҡ! Урын юҡ! Бер буш урын да юҡ! — тип ҡысҡыра башланы.

Алиса:

— Нисек инде юҡ? — тип аптыраны ла иң түрҙәге ултырғысҡа менеп ултырҙы.

— Һөт эс! — тип илгәҙәкләнеп тәҡдим итте Май Ҡуяны.

Алиса өҫтәлгә күҙ йүгертеп сыҡты. Бер һауытта ла һөт күренмәй ине.

— Нишләптер мин уны күрмәйем, — тине.

Май Ҡуяныының яуабы әҙер:

— Әлбиттә! Ул бында юҡ та!

— Ә ниңә булмаған нәмәне тәҡдим итәһегеҙ? Был тәрбиәһеҙлек.



— Ә һин өҫтәл артына саҡырыуһыҙ килеп ултыраһың. Был да тәрбиәһеҙлек!

— Ҙур табын өс кешегә генә әҙерләнгән тип уйламағайным. Сынаяҡтар бында бик күп.

— Һине бигерәк сәс баҫҡан, — тип ҡапыл телгә килде Тупаҫҡай.

Быға тиклем ул Алисаны ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп, шым ғына ултыра ине.

— Сәстәреңде киҫтерһәң, бик матур булыр инең...

Алиса уны киҫкен тауыш менән бүлдерҙе:

— Кешенең шәхси эшенә ҡыҫылмаһағыҙ булмаймы ни? Был тупаҫлыҡ бит!

Тупаҫҡай бер мәлгә ауыҙын асып ҡалды, аңына килгәс:

— Ҡарға ниммәһе менән ҡарға оҡшаған? — тип һораны.

«Быныһы ҡыҙығыраҡ булыр. Йомаҡтарҙы яратам мин». Шулай уйлап, Алиса:

— Мин был йомаҡты сисә алырмын, — тине.

Май Ҡуяны һорауҙы асыҡланы:

— Был йомаҡтың яуабын беләм, тип әйтергә теләйһеңдер? Дөрөҫмө?

— Дөп-дөрөҫ, — тип ризалашты Алиса.

Май Ҡуяны үҙенең майлы күҙҙәрен ҡыҫып:

— Һәр ваҡыт нимә уйлаһаң, шуны әйтергә кәрәк, — тип өйрәтеп ҡуйҙы.

— Мин шулай эшләйем дә, — тип аңлата башланы Алиса. — Ни әйтеремде тәүҙә уйлайым. Һеҙ әйткән менән бер үк түгелме ни был?

Тупаҫҡай һүҙгә ҡыҫылды:

— Бөтөнләй бер түгел! Былай булһа, һин «мин ашаған нәмәне күрәм» менән «мин күргән нәмәне ашайым» тигәндәрҙе бер иш тип әйтерһең тағы!

— Һин «нимәм бар, шуны яратам» менән «нимәне яратам, шул бар» тигәндәрҙе лә бер үк тип әйтерһең! — тип шатланып дауам итте Май Ҡуяны.

— Ә һин, моғайын, «мин йоҡлағанда тын алам» менән «мин тын алғанда йоҡлайым» тигәндәрҙе бер үк тип әйтерһең! — Йоҡосо Сыҫҡан күҙен асмай ғына шулай шыбырҙаны.

— Һинең өсөн ул ысынлап та барыбер инде! — тип бүлде уны Тупаҫҡай. Шуның менән бәхәс бөттө.

Бер аҙ шым ултырҙылар. Алиса ҡар менән ҡарғалар тураһында белгәндәрен иҫенә төшөрөргә тырышты. Был хаҡта уның белеме бик аҙ ине.

Беренсе булып уға Тупаҫҡай өндәште:

— Бөгөн нисәһе ул?

Кеҫәһенән сәғәтен сығарып, борсоулы төҫтә һелкетеп ҡараны, унан ҡолағына яҡын килтерҙе.

Алиса әҙерәк уйлап торғас:

— Дүрте, — тип яуап бирҙе.

— Ике көнгә һуңлай, — тине Тупаҫҡай күңелһеҙләнеп. — Әйткәйнем бит, аҡ май менән майларға ярамай тип! — Ул асыулы ҡараш менән Май Ҡуянына боролдо.

Май Ҡуяны ҡыйыуһыҙ ғына тауыш сығарҙы:

— Майҙың иң яңыһы ине...

— Шулайын шулай ҙа бит, күрәһең, эсенә валсыҡ төшкәндер, — тип мығырҙаны Тупаҫҡай. — Икмәк бысағы менән майламаҫҡа ине.

Май Ҡуяны сәғәтте ҡулына алды, моңайып, улай-былай әйләндереп ҡараны, алдында торған сынаяҡҡа манып, сәйҙә сайҡатты ла:

— Аҡ майҙың ап-ағы ине, — тип ҡабатланы, хатта майлы күҙендә йәш йылтыраны.

Алиса, муйынын һуҙып, ғәжәп сәғәтте күрергә тырышты:

— Ниндәй ҡыҙыҡ сәғәт! Ул ваҡытты түгел, ә көндө күрһәтә икән дә!

— Тапҡан ҡыҙыҡты! Һинең сәғәтең йылды күрһәтмәйме ни?

— Бына тағы! Йылды күрһәтеп тороуҙың ни хәжәте? Йыл бик оҙаҡҡа һуҙыла.

— Минең дә шулай уҡ! — тине Тупаҫҡай.

Алиса аптырап ҡалды. Тупаҫҡайҙың әйткәндәрендә бер мәғәнә лә юҡ һымаҡ ине, ләкин айырым алғанда һәр бер һүҙе аңлашылып тора.

— Мин һеҙҙе аңлап еткермәйем,— тип ипле генә өндәште ул.

— Йоҡосо тағы йоҡлай. — Был һүҙҙәр менән Тупаҫҡай сысҡандың моронона сәй ҡойҙо.

Йоҡосо Сысҡан, башын ҡағып, күҙен асмайынса:

— Мин дә шуны әйтергә иткәйнем, — тип ҡуйҙы.

— Йомаҡтың яуабын уйлап таптыңмы? — Тупаҫҡай йәнә Алисаға өндәште.

— Юҡ, мин белмәйем. Яуабы ниндәй һуң?

— Үҙем дә белмәйем, — тине Тупаҫҡай

— Мин дә! — тип шатланып ҡысҡырҙы Май Ҡуяны.

Был аҡылһыҙҙар Алисаның йәненә тейә башланы, асыуын тыя алманы:

— Яуапһыҙ йомаҡтарға ҡарағанда файҙалыраҡ бүтән берәй нәмә уйлап табыр инегеҙ, исмаһам. Ә былай ваҡытығыҙҙы бушҡа әрәм итәһегеҙ!

— Ваҡытты минең хәтле белһәң, былай һөйләмәҫ инең, — тине Тупаҫҡай. — Уны әрәм итеп булмай! Ул үҙен-үҙен белә!

— Аңламайым...

— Әлбиттә аңламайһың! — тип мыҫҡыллап көлдө Тупаҫҡай. — Һинең уның менән һөйләшкәнең дә юҡтыр әле!

— Һөйләшкәнем, бәлки, булмағандыр. —Алиса тыйнаҡ ҡына һүҙ башланы. — Ләкин ваҡытты нисек үлтерергә тип күп тапҡыр уйлағаным бар.

— Ишетәһегеҙме, «ваҡытты үлтерергә»! Ваҡыттың үҙенә был оҡшар инеме икән? Әгәр һин Ваҡыт менән дуҫ булһаң, унан теләгән сәғәтте һорай алыр инең. Мәҫәлән, хәҙер иртәнге сәғәт туғыҙ. Дәрескә барырға кәрәк. Ваҡыт дуҫыңдың ҡолағына бер генә һүҙ өндәшһәң — күр ҙә тор, сәғәт телдәре тиҙ-тиҙ әйләнә башлай. Күҙ асып йомғансы сәғәт ике. Төш!

— Ҡайһылай яҡшы булыр ине, — тип бойо ҡына тауыш сығарҙы Май Ҡуяны.

Уны Алиса ла йөпләне:

— Эйе шул, бик яҡшы булыр ине. Тик мин асығып өлгөрмәйем бит әле.

— Тәүҙә, бәлки, асыҡмаҫһың да, ләкин һин бит сәғәт телен төш ваҡытында күпме теләйһең, шунса тота алаһың.

— Ә, аңлашылды. Һеҙ шулай иттегеҙме? — тип һораны Алиса, үҙенең отҡорлоғона шатланып.

Тупаҫҡай күңелһеҙләнеп баш ҡаҡты.

— Юҡ, беҙ Ваҡыт менән май айында талаштыҡ. Тап ошо (ул балғалаҡ менән Май Ҡуянына төртөп күрһәтте) аҡылынан яҙыр алдынан. Черви Батшаһы ҙур концерт биргәндә мин «Ҡар малай» йырын йырларға тейеш инем. Был йырҙы беләһеңме?

*Ҡар малайҙың ҡулы һыуыҡ,*
*Һыуыҡ булһа ла ҡыҫам.*
*Һағыныуыма сама юҡ,*
*Тик һине көтәм, көтәм.*

— Ишеткәнем бар шикелле, — тип ҡуйҙы Алиса.

— Ҡушымтаһы былай:

*Ҡар малай, ҡар малай,*
*Яңы йылда осраштыр,*
*Ҡар яуһа ине шулай.*

Йоҡосо Сысҡан башын күтәреп йырлап ебәрҙе:

— Ҡар... малай... ҡар... малай. — Ул туҡтауһыҙ «малай, малай» тип һамаҡлап, ҡабат йоҡоға талды. Ҡуян менән Тупаҫҡайға, уны туҡтатыр өсөн, ике яҡтан ныҡ итеп семтеп алырға тура килде.

— Йырҙың беренсе куплетын йырлап та бөтмәнем, — тип дауам итте Тупаҫҡай, — кемдер: «Был әҙәм ауыҙын бөтөнләй асмаһа, яҡшыраҡ булыр ине», — тип ҡысҡырып ебәрҙе. «Нисек булһа ла, ваҡытты үлтерергә тырыша бит». Быны ишетеү менән Батша ҡатыны зыҡ ҡуба башланы. «Ваҡытты үлтерергә? Ул Ваҡытты үлтерергә теләй! Башын киҫеп ташлағыҙ!»— тип һөрән һалды.

Алиса урынынан һикереп торҙо:

— Ниндәй бәғерһеҙлек!

— Шул көндән бирле, Ваҡыт минең өсөн бер нимә лә эшләргә теләмәй! Ә сәғәттә һаман алты... — тип һүҙен бөтөрҙө Тупаҫҡай.

Алисаның аңына саҡ барып етте:

— Шуға ла бында гел сәй әҙерләнгән!

— Эйе, — тип иларҙай булып яуап бирҙе Тупаҫҡай. — Бында гел сәй эсеү ваҡыты. Беҙ һауыт-һаба йыуып та өлгөрмәйбеҙ!

— Күсеп кенә ултыраһығыҙмы?

— Дөп-дөрөҫ. Бер сынаяҡ сәй эсәбеҙ ҙә күсеп ултырабыҙ.

Алиса ҡыҙыҡһыныуын дауам итте:

— Ә өҫтәлдең ситенә барып еткәс, ни булыр?

— Бүтән темаға һөйләшһәк нисек булыр икән, ә? — тип иҫнәне Май Ҡуяны. — Һүҙегеҙҙән тамам биҙҙем. Тәкдим итәм: һылыу беҙгә әкиәт һөйләһен.

Алиса ҡурҡып китте:

— Мин бер ниндәй ҙә әкиәт белмәйем.

— Улай булғас, Йоҡосо әкиәт һөйләһен, — тип ҡысҡырып ебәрҙе Май Ҡуяны менән Тупаҫҡай. — Йоҡосо, Йоҡосо, уян әле! — Улар сысҡанды тартҡылай башланы.

Йоҡосо яйлап тәүҙә бер күҙен, әҙерәк торғас, икенсеһен асты.

— Мин йоҡларға уйламағайным да, һеҙ һөйләшкәндең бөтәһен дә ишетеп ултырҙым.

— Әкиәт һөйлә! — тип талап итте Май Ҡуяны.

— Эйе, һөйләгеҙ әле! — тип үтенде Алиса.

Тупаҫҡай ҙа ҡабаландырҙы:

— Йәһәтерәк бул! Йә тағы ла йоҡлап китерһең!

— Борон-борон заманда йәшәгән, ти, өс ҡыҙ. Өс ҡыҙыҡай — өс һеңлекәй: Элси, Лэси, Тилли. Ә йәшәгәндәр, ти, улар тәрән ҡойо эсендә...

— Ә улар нимә ашағандар? — тип һораны Алиса. Уны һәр ваҡыт кешеләрҙең нимә ашап-эсеүе ҡыҙыҡһындыра ине.

— Кеҫәл, — тине Йоҡосо, әҙерәк уйлап торғас.

Алиса быға ҡаршы төштө:

— Көн дә кеҫәл генә? Был мөмкин түгел. Улар ауырып китер ине.

— Ә улар ауырып киткәндәр ҙә. Ныҡ итеп, — тип яуап бирҙе Йоҡосо.

Алиса ғүмер буйы кеҫәл ашап ятҡан ҡыҙҙарҙы күҙ ал-

дына килтерергә тырышты, ләкин был бик ғәжәп хәл ине, шуға ла ул икенсе һорау бирергә булды.

— Ә улар ни эшләп ҡойо эсендә йәшәгәндәр?

— Тағы сәй эсәһеңме? — тине ҡапыл Май Ҡуяны.

— Тағы ла? — тип ирештерҙе Алиса. — Мин әле бер нәмә лә эсмәнем.

— Ул бүтәнсә сәй эсмәй... — Быны һауаға ҡарап Май Ҡуяны иғлан итте.

— Эй, Ҡуян, һин, ул беҙҙең сәйҙе эсмәй, тип әйтергә теләйһеңдер? Ул бүтән сәйҙе эскән дә булыр ине, моғайын, — тине Тупаҫҡай.

Алиса уны:

— Һеҙҙең фекерегеҙҙе бер кем дә һорамай,— тип туҡтатты.

Тупаҫҡай еңеүсе һымаҡ ҡыуанып китте:

— Ә хәҙер кем кешенең шәхси эшенә ҡыҫыла?

Алиса быға ни әйтергә белмәй аптырап ҡалды. Ул үҙенә сәй яһап, икмәгенә май һыланы ла, Йоҡосо-Сысҡанға ҡарап, һорауын ҡабатланы:

— Нишләп һуң улар ҡойо эсендә йәшәгән?

Йоҡосо Сысҡан уйға сумды.

— Миңә ярты сынаяҡ ҡына сәй яһа әле, — тип үтенде Тупаҫҡай Май Ҡуянына.

Май Ҡуяны сынаяҡ тултырып сәй яһаны ла, бысаҡ алып уны ҡап уртаға ярҙы.

— Һораған ярты сынаяғығыҙ. — Ҡуян, майлы күҙҙәрен йылтыратып, Тупаҫҡай алдына ярты сынаяҡ ултыртты.

Йоҡосо Сысҡан, бер аҙ йоҡлап алғас, йәнә телгә килде:

— Сөнки ҡойо эсендә кеҫәл булған.

— Ундай ҡойолар булмай! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Алиса.

Тупаҫҡай менән Май Ҡуяны «тик ултыр» тип шыбырҙаны, ләкин Йоҡосо үсегеп тә өлгөрҙө.

— Белдекле булып алдан ҡысҡырып торғас, үҙең һөйлә!

— Ярай, ярай, мин бүтән ҡамасауламайым. Бәлки, шундай бер ҡойо барҙыр.

— «Бер ҡойо», — тип мыҫҡыллап көлдө Йоҡосо, унан

дауам итте: — Теге өс ҡыҙыҡай-һеңлекәй бик һәйбәт, йырлап йәшәгәндәр, ти...

Алиса һорарға ашыҡты:

— Йырлап? Ә нимә тип йырлағандар улар?

— Йырламағандар, ашап ҡына йәшәгәндәр. Әлбиттә, кеҫәлде.

— Миңә таҙа сынаяҡ кәрәк, — тип бүлдерҙе уны Тупаҫҡай. — Әйҙәгеҙ күсеп ултырайыҡ. — Ул күршеләге ултырғысҡа шыуып ултырҙы.

Йоҡосо уның урынына күсте. Май Ҡуяны — Йоҡосо урынына, ә Алиса теләр-теләмәҫ кенә Ҡуяндың ултырғысына ултырҙы. Был күсенеүҙән Тупаҫҡай ғына отто, Алиса, киреһенсә, ныҡ отолдо. Сөнки, Май Ҡуянының урыны бик бысраҡ ине, етмәһә, ул үҙенең тәрилкәһенә һөт һауытын ҡаплап ҡуйғайны.

Алисаның Йоҡосоно үпкәләткеһе килмәгәйне, ләкин ул иплэп кенә һорарға булды:

— Мин аңламайым... Нисек инде улар унда йәшәгәндәр?

— Нимәһен аңламайһың инде, — тип ҡысҡыра башланы Тупаҫҡай. — Балыҡтар һыуҙа йәшәй бит, ә был һеңлекәйҙәр кеҫәлдә йәшәгәндәр!

— Шулай итеп йәшәгәндәр, ти, улар... — тип иҫнәй-иҫнәй һөйләп ултыра Йоҡосо Сысҡан йоҡоло тауыш менән. — Балыҡтар һымаҡ кеҫәлдә. Ҡыҙҙар һүрәт төшөрөргә яратҡан... Төрлө нәмәләрҙе... «М» хәрефенә башланғандарҙы...

— Ә ни эшләп «М» хәрефенә? — тип һораны Алиса.

— Нимәһе менән һиңә оҡшамай ул? — тине Май Ҡуяны.

Ул арала Йоҡосо күҙен йомоп ойоп та киткән. Тупаҫҡай уны ныҡ итеп семтеп алды. Сысҡан сырылдап һикереп торҙо.

— ...«М» хәрефенә башлана, — тип дауам итте ул. — Улар мендәрҙәрҙе, майҙы, мамыҡ, мейес, матурлыҡты төшөргәндәр... Һинең берәй ҡасан матурлыҡты төшөргәнең бармы?

Алиса аңламаны:

— Нимәнең матурлығын?

— Бер нәмәнең дә түгел. Былай ғына матурлыҡты.

— Белмәйем, — тине Алиса. — Бәлки...

— Ә белмәһәң — ауыҙыңды яп та ултыр, — тип бүлдерҙе уны Тупаҫҡай.

Былдай тупаҫлыҡҡа Алиса түҙә алманы: өҫтәл артынан тороп ҡапҡаға табан китте.

Йоҡосо шунда уҡ йоҡоға талды, ә Май Ҡуяны менән Тупаҫҡай Алисаның китеүенә иғтибар ҙа итмәне. Алиса, кире саҡырмаҫтармы икән тип, бер-ике тапҡыр әйләнеп ҡараны.

Һуңғы тапҡыр әйләнгәндә, Май Ҡуяны менән Тупаҫҡай Йоҡосоно сәйгүнгә тығырға маташа ине.

— Бүтән бында бер ҡасан да килмәйем! — тип ҡат-ҡат ҡабатлап, Алиса урман эсенә инеп китте. — Ғүмеремдә былдай аҡылһыҙ сәй табыны күргәнем юҡ ине!

Ҡапыл ул бер ағаста ишек күреп ҡалды.

«Бына ғәжәп! Хәйер, бөгөн бөтәһе лә ғәжәп! Был ишектән инәйем әле»,— тип уйланы ул, шулай эшләне лә. Тағы оҙонса бүлмәгә, быяла өҫтәл янына барып сыҡты.

— Хәҙер инде мин аҡыллыраҡ булырмын, — тине Алиса үҙенә.

Асҡысты өҫтәлдән алып, баҡсаға сыға торған бәләкәс ишекте асты. Кеҫәһендә ятҡан бәшмәк һыныҡын алып, буйы бәләкәйләнгәнсе ашаны. Тар коридорҙы үткәс, ул, ниһәйәт, гүзәл сәскәләр биҙәгән, һалҡын фонтандар атылған һоҡланғыс баҡсаға барып сыҡты.

## Һигеҙенсе бүлек

# БАТША ҒАИЛӘҺЕНЕҢ УЙЫНЫ

Баҡсаның бер мөйөшөндә ҙур аҡ роза ҡыуағы үҫеп ултыра ине. Ләкин уны өс баҡсасы ни эшләптер ҡыҙыл буяу менән буяп тора. Алиса яҡыныраҡ барып бының сәбәбен белешергә булды. Әҙерәк атлағас, ул бер баҡсасының икенсеһенә:

— Ипләберәк, Бишле! Тағы ла миңә сәсрәттең бит! — тигәнен ишетеп ҡалды.

— Мин ғәйепле түгел! Етеле ҡултыҡ аҫтыма төртөп ебәрҙе! — тип яуап бирҙе Бишле.

— Дөрөҫ, Бишле, ғәйебеңде гел бүтәндәргә ауҙара бел! — тип үпкәләгән тауыш сығарҙы Етеле.

Бишле, уның һүҙен бүлеп:

— Һин өндәшмәй торор инең. Һинең башыңды әллә ҡасан киҫеп ташларға кәрәк, тип батша ҡатынының әйткәнен кисә үҙ ҡолағым менән ишеттем.

— Ни өсөн? — тип һораны беренсе баҡсасы.

— Танауыңды тыҡмай тор! — тип ҡысҡырҙы Етеле.

— Юҡ, ул да ишетһен, — тине Бишле. — Сөнки кисә Етеле ашнаҡсыға һуған башы урынына ләлә һуғанбашын килтереп биргән.

Етеле түҙемлеген юғалтып, бумалаһын ергә ташланы.

— Бындай ғәҙелһеҙлекте... — тип әйтә генә башланы ла Алисаны күреү менән туҡтап ҡалды.

Өсөһө лә ергә тиклем баш эйҙе.

— Ә ни эшләп һеҙ аҡ розаларҙы ҡыҙылға буяйһығыҙ?

Алисаның ҡыйыуһыҙ ғына һорауына яуап бирмәй,



Бишле менән Етеле Икелегә ҡараны. Тегеһе тирә-яҡты байҡап сыҡты ла, тауышын әкренәйтеп:

— Беләһеңме, һылыу, бында ҡыҙыл роза ҡыуағын ултыртырға тейеш инек, ә беҙ, аңралар, аҡты ултыртҡанбыҙ. Батша ҡатыны белеп ҡалһа, бөттө беҙҙең баш. Ул күрмәҫ борон тырышҡан булабыҙ...

Шул ваҡытта баҡса юлын күҙәтеп торған Бишле:

— Батша килә! — тип ҡысҡырҙы.

Баҡсасылар йөҙ түбән йығылышты.

Аяҡ тауыштары ишетелде. Алиса, Батшаны күрәйем тип, әйләнеп ҡараны.

Иң алдан һөңгөләрен эйеп тотҡан ун һалдат килә. Улар әлеге баҡсасыларға бик тә оҡшап тора — шундай уҡ дүрт мөйөшлө һәм яҫылар, мөйөштәренән аяҡ-ҡулдары сосайған. Һалдаттар артынан батша һарайындағы ун түрә атлай. Кейемдәре сатрашлап сигелгән, үҙҙәре, һалдаттар һымаҡ, парлап килә.

Түрәләр артынан шулай уҡ парлашып батша балалары йүгерә. Улар ҙа унау. Бәләкәс сабыйҙар ҡулға-ҡул тотоношоп, һикерешеп ала, ҡыҙыл алтынлы кейемдәре ялтйолт итә. Балалар артынан, кәрттәге бөтә мастарға оҡшап, Батша менән Ҡатыны ҡуҡырайышып килә. Төркөмдә Аҡ Ҡуян да бар икән әле. Ул ниҙер һөйләгән була, бөтәһенә йылмая. Ҡуян Алиса эргәһенән уны танымай үтеп китте.

Ҡунаҡтар артынан Черви Валеты ал төҫлө мендәрҙә батша тажын тотоп килә. Был тантаналы төркөмдөң иң аҙағынан Черви Батшаһы менән уның Ҡатыны атлай.

Алиса ҡаушап ҡалды: бындай тантаналы төркөмдө күреү менән, бәлки, уға ла йөҙ түбән йығылырға кәрәктер? Ләкин был хаҡта бер ниндәй ҙә ҡағиҙә иҫенә төшмәне. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтәһе йөҙ түбән йығылһа, был тантаналы йөрөштө кем өсөн үткәрәләр һуң? Береһе бер ни күрмәҫ бит... Алиса урынында ҡалды.

Төркөм Алисаны күреү менән туҡтаны, ә Черви Батшаның ҡатыны:

— Быныһы кем тағы? — тип һораны.

Ул Валетҡа өндәшкән һымаҡ булды, ләкин Валет яуап урынына йылмайып башын эйҙе.

Валеттан яуап алып булмағас, Батша ҡатыны Алисанан:

— Һинең исемең нисек, бала? — тип һораны.

— Минең исемем Алиса, Ғали йәнәп! — тип ихтирам менән яуап бирҙе Алиса.

Ә үҙе эстән: «Былар ни бары кәрт колодаһы бит! Ниңә уларҙан ҡурҡып торорға?» — тип уйлап ҡуйҙы.

— Ә былары кем? — Батша ҡатыны баҡсасыларға төртөп күрһәтте. Улар йөҙ түбән ятҡас, Батша ҡатыны былар баҡсасымы, түрәләрме, әллә үҙ балаларымы икәнен айыра алманы, сөнки бөтөн кәрттәрҙең дә артҡы яғы бер иш бит.

— Мин ҡайҙан беләйем... — Алиса үҙ батырлығына үҙе аптыраны. — Был минең эшем түгел.

Батша ҡатыны шунда уҡ ҡыҙара-бүртенеп зыҡ ҡуба башланы:

— Башын киҫеп ташлағыҙ! Киҫеп...

— Буш һүҙ! — тип ҡысҡырҙы Алиса.

Батша ҡатыны шымып ҡалды. Батша, ҡулын уның яурынына һалып, ҡыйыуһыҙ ғына:

— Тыныслан, дуҫҡай! Ул әле бала ғына бит! — тине.

Батша ҡатыны, ятҡан баҡсасыларға ымлап, Валетҡа:

— Әйләндер уларҙы! — тип бойорҙо.

Валет итегенең осо менән баҡсасыларҙы ипләп кенә әйләндерҙе.

— Тороғоҙ! — тип ҡолаҡ тондорғос тауыш менән ҡысҡырҙы Батша ҡатыны.

Баҡсасылар аяғүрә һикереп тороу менән, Батшаға, Ҡатынына, батша балаларына һәм башҡаларға туҡтауһыҙ баш эйергә тотондо.

— Хәҙер үк туҡтағыҙ! Башым әйләнеп китте һеҙҙән! — тип тирә-яҡты яңғыратты Батша ҡатыны һәм роза ҡыуағына ҡараны.

— Бында ни эшләнегеҙ?

— Һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән, Ғали йәнәп, — тип тубыҡланып әйтә башланы Икеле. — Беҙ...

— Бөтәһе лә аңлашылды! — тине Батша ҡатыны, роза ҡыуағын иғтибар менән ҡарап сыҡҡас. — Баштарын киҫеп ташлағыҙ!


69

Бөтәһе ҡуҙғалып китте. Язаны башҡарыу өсөн өс һалдат ҡына тороп ҡалды. Бахыр баҡсасылар ярҙам һорап Алисаға ташланды.

— Ҡурҡмағыҙ, мин һеҙҙе яҡлармын, — тип тынысландырҙы уларҙы Алиса һәм эргәлә торған сәскә һауытына өсөһөн дә тығып ҡуйҙы.

Һалдаттар, уларҙы эҙләп-эҙләп таба алмағас, үҙ юлдары менән китте.

— Йә, баштарын киҫеп ташланығыҙмы? — тип һораны Батша ҡатыны.

— Юҡ булды баштары, Ғали йәнәп! — тип бер тауыштан яуап бирҙе һалдаттар.

— Шәп! Крокет уйнайыҡмы?

Һалдаттар Алисаға ҡараны: күрәһең, Батша ҡатыны уға өндәшәләр.

— Уйнайыҡ! — тип ҡысҡырҙы Алиса.

— Әйҙә киттек!

Алиса ҡунаҡтарға ҡушылып атланы.

— Ниндәй... ниндәй матур көн бөгөн, шулай бит? — тип кемдер өндәште. Алиса күҙен күтәреп ҡараһа — эргәһендә Аҡ Ҡуян китеп бара.

— Эйе, көн яҡшы, — тип ризалашты Алиса. — Ә Герцогиня ҡайҙа?

— Ш-ш-ш! — Ҡуян тирә-яҡҡа ҡаранып алды ла, аяҡ осона баҫып, Алисаның ҡолағына: — Уны хөкөмгә тарттырҙылар, — тип шыбырҙаны.

— Ни өсөн?

— Һин «бик йәл» тип әйткәндәй булдыңмы?

— Бер ҙә йәл түгел миңә! Ни өсөн, тип һораным.

— Ул Батша ҡатынының сикәһенә сапты.

Алиса шатланып йылмайҙы.

— Тик тор, Батша ҡатыны күреп ҡалмаһын. Герцогиня уйынға һуңлап килгәйне, ә Батша ҡатыны...

— Бөтәгеҙ ҙә урындарға баҫығыҙ! — тип ҡысҡырҙы Батша ҡатыны.

Барыһы ла этешергә-төртөшөргә кереште. Бер минут та үтмәне, һәр кем үҙ урынын алды.

Уйын башланды.

Алисаның бер ҡасан да быңдай ғәжәп уйынды күргәне

юҡ ине. Уйын майҙаны — соҡор-саҡыр, шар урынына — терпе, сүкеш урынына — фламинго ҡоштары, ә ҡапҡа урынына — һалдаттар. Улар дуға шикелле бөгөлөп, уйын бөткәнсе шулай баҫып торҙолар.

Тәүҙә Алиса үҙенең фламингоһын йәтешләп тота алмай йонсоно: уны баш түбән ҡултыҡ аҫтына тығып, аяғы менән терпегә тоҫҡап һуғам ғына тигәндә, ҡош муйынын бөгөп башын күтәрә лә, аптырап Алисаның күҙенә ҡарай, Алиса көлә башлай; ҡошто кире баш түбән төшөрөп өлгөрмәй, ҡараһа, терпе урынында юҡ, майҙандың икенсе осона табан ҡабаланмай ғына китеп бара. Бөтә терпеләр ҙә соҡорҙарға төшөп бөттө, һалдаттар ҙа майҙан буйлап йөрөй башланы.

«Ни тиһәң дә, бик ҡыйын уйын икән был», — тип уйланы Алиса.

Уйнаусылар сират көтөп тормайынса, бер үк ваҡытта уйнай башлай, етмәһә терпеләр өсөн һуғышып, талашып бөттөләр. Тиҙҙән Батша ҡатыны, түҙемлеген юғалтып, ҡысҡырынырға тотондо:

— Бының башын киҫеп ташларға! Уның башын киҫеп ташларға!

Алиса борсола башланы. Әлегә ул Батша ҡатыны менән талашып өлгөрмәһә лә, тегенең уға һәр минутта бәйләнеп китеүе ихтимал ине.

«Миңә ни булыр икән? Бында баш киҫергә шул тиклем яраталар, нисек әле бөтәһе ҡырылып бөтмәгән?» — тип уйланы Алиса.

Ул бынан ҡасып китеү яйын самалай башланы. Тирә-яғына ҡаранып алды. Ҡапыл өҫтә нимәлер күренеп ҡалды. Алиса тәүҙә уның нимә икәнен дә аңламаны. Текләберәк ҡараһа — һауала йылмайыу эленеп тора.

«Был Чешир Бесәйе! Бик яҡшы! Һөйләшергә әҙәм табылды, исмаһам!» — тип эстән генә шатланып ҡуйҙы Алиса.

Бесәй, ауыҙы барлыҡҡа килгәс:

— Йә, хәлдәр нисек? — тип һораны.

Алиса бесәйҙең күҙҙәре барлыҡҡа килеүен көтөп торҙо ла башын ҡаҡты. «Яуап бирергә әле иртә. Ҡолаҡтары күренгәнен көтәйем, береһе булһа ла күренһен!»

Бер аҙҙан бесәйҙең башы күренде. Алиса, фламингоһын ергә ҡуйып, уйын тураһында һөйләй башланы.

— Минеңсә, бөтөнләй уйнай белмәйҙәр. Ғәҙеллек юҡ, барыһы ҡысҡырыша, талаша. Ҡағиҙәләре юҡ, булһа ла — уларҙы береһе лә үтәмәй. Беләһегеҙме, бөтә нәмә тере булғанда, уйнауы шундай ҡыйын. Мәҫәлән, тоҫмаллап һуға торған ҡапҡа майҙандың теге яғына киткән! Батша ҡатынының терпеһен бәрәйем генә тигәндә, ул үҙе йүгереп китте!

— Ә һиңә батша ҡатыны оҡшаймы? — тип шым ғына һораны Бесәй.

— Бер ҙә оҡшамай. Ул шундай... — Алиса Батша ҡатынының артта тыңлап тороуын һиҙеп ҡалды, — һәйбәт уйнай. Отолаһың да ҡуяһың, — тип һүҙен бөтөрҙө ул.

Батша ҡатыны йылмайып ситкә китте.

— Кем менән һөйләшеп тораһың? — тип ҡыҙыҡһынды Батша, осоп йөрөгән бесәй башына ҡарап.

— Был минең дуҫым, Чешир Бесәйе. Таныштырырға рөхсәт итегеҙ...

— Ул миңә оҡшамай, — тине Батша. — Ләкин, теләһә, ҡулымды үпәс итһен.

— Теләк юҡ шул, — тине Бесәй.

— Әрепләшмә! — Батша ҡаушап ҡалды. — Һәм миңә улай ҡарама. — Батша Алисаның артына боҫто.

— Бесәйҙәргә батшаларға ҡарарға ярай шикелле. Мин ҡайҙалыр уҡығайным һымаҡ,— тине Алиса.

— Юҡ, уны күҙҙән алып ташларға кәрәк! — Батша шулай ҡарар итте лә үтеп барған Ҡатынын күреп: — Ҡәҙерлем, ошо бесәйҙе алып ташларға ҡуш әле, — тип үтенде.

Батша ҡатынының бөтә нәмәгә яуабы бер генә:

— Башын киҫеп ташлағыҙ!

— Мин йәллатте үҙем саҡырам! — тип шатланып, Батша тороп йүгерҙе.

Шунда уҡ Батша ҡатынының тауышы майҙандың икенсе яғында яңғырай башланы. Алиса, ни булды икән, тип шул яҡҡа атланы. Батша ҡатыны үҙ сираттарын үткәргән өс уйынсының башын киҫеп ташларға бойора икән.

Бөтәһе лә ҡысҡырышҡас, Алиса бер ни аңламаны, соҡорҙарҙан үҙенең терпеһен эҙләп кире китте.

Терпеһенең икенсе бер терпе менән һуғышҡанын күреп ҡалды ул. Уларҙы һуғып ебәрергә кәрәк ине, ләкин Алисаның фламингоһы баҡсаның бер мөйөшөндәге ағасҡа осоп ҡунырға маташа. Уны тотоп килтергәнсе, терпеләр һуғышып бөтөп, ҡасып өлгөргәйне инде.

«Эй, ярай, — тип уйланы Алиса. — Ҡапҡа барыбер юҡ».

Ул фламингоһын, тағы ла ҡасып китмәһен тип, ҡултыҡ аҫтына тыҡты ла Бесәй янына китте.

Бесәйҙең башы осоп йөрөгән ергә еткәс, Алиса ҙур төркөм күрҙе. Йәлләт, Батша, уның Ҡатыны ҡысҡырышып бәхәсләшә ине.

Алисаны күреү менән, бөтәһе лә унан бәхәсте асыҡлауын һорап, кем уҙарҙан эштең нимәлә икәнен аңлатырға тотондо.

Йәлләт: «Баштан бүтән бер нәмәһе лә булмағас, башты киҫеп ташлап булмай, — тине. Бындайҙы эшләгәне юҡ ине уның, эшләргә теләмәй ҙә. — Ҡартмын мин хәҙер...»

Батша, баш булғас, юҡ-барҙы һөйләп тормайынса, уны киҫеп тә була, тип ныҡышты.

Батша ҡатыны: «Хәҙер үк һүҙҙән туҡтап эшкә тотонмаһағыҙ, бөтәгеҙҙең дә башын ҡырҡып ташлайым!» — тип ҡысҡырҙы.

Алиса уйланып торҙо ла:

— Бесәй Герцогиняныҡы. Уның менән кәңәшләшергә кәрәк, — тип тәкдим итте.

— Ул төрмәлә. Килтерегеҙ уны бында! — тип бойорҙо Батша ҡатыны Йәллләткә. Йәллләт бойороҡто үтәргә ташланды.

Ул киткәс, Бесәй башы әкрен генә юғала башланы, һәм, йәллләт Герцогиняны алып килеүгә, баш бөтөнләй юҡ булды. Батша менән йәллләт майҙан буйлап башты эҙләргә тотондо, ә ҡунаҡтар уйынды дауам итте.

6-В947

## Туғыҙынсы бүлек

# ГӨБӨРГӘЙЕЛ ҺӨЙЛӘГӘН ХИКӘЙӘ

— Беләһеңме, ҡәҙерлем, һине күреүемә мин бик шатмын. — Герцогиня Алисаны ҡултыҡланы ла үҙе менән алып китте.

Алиса Герцогиняның шундай мөләйем була алыуына шатланып ҡуйҙы. Бәлки, ул боростан борсолоп йөрөгәндер, тип уйланы.

— Мин дә, герцогиня булғас, — тине ул, үҙ-үҙенә ышанмайынса ғына, — ашҡа бер ҡасан да борос һалдырмаясаҡмын! Аш былай ҙа тәмле була! Борос ашаған кешеләр борсолоп йәшәй...

Алиса яңы ҡағиҙә уйлап сығарҙы:

*— Һуғандан — һуғышалар,*
*һеркәнән — һеркелдәйҙәр,*
*туҡмастан — туҡмалалар,*
*йыуанан — йыуаш булалар,*
*ә көлсәнән — көләләр.*

Берәһе лә белмәй шул был ҡағиҙәне! Ниндәй яҡшы булыр ине, кешеләр көлсә ашап көлөп кенә йәшәһә! Үҙ уйы менән булып, Алиса Герцогиняны бөтөнләй онотто. Герцогиня ҡапыл өндәшкәнгә ул терт итеп ҡалды:

— Бер һүҙ ҙә өндәшмәйһең, ҡәҙерлем, уйланып киттеңме? Һығымтаһы былай: юҡ, иҫемә төшмәй тора әле. Ярай, һуңынан әйтермен...

— Бәлки, бында бер ниндәй ҙә һығымта юҡтыр!

— Нисек инде — юҡ! Бөтә нәмәнең һығымтаһын һығып алырға була! — Герцогиня Алисаны һығып ҡосаҡлап алды.

Алисаға был бөтөнләй оҡшаманы: беренсенән, Герцогиня ҡот оскос йәмһеҙ ине, ә икенсенән, уның осло эйәге Алисаның иңбашына тап килеп төртөп тора. Алиса ҡуҙғалырға ҡыйманы — Герцогиняны этеп ебәреү килешмәҫ, тип уйланы ул. Һөйләшеүҙе дауам итеү өсөн:

— Уйын яйға һалынды, шикелле, — тип ҡуйҙы.

— Мин һинең менән тулыһынса килешәм. Ә һығымтаһы бының шунда: иң мөһиме мөхәббәт — донъяға бирә хәрәкәт!

Алиса, тауышын баҫыбыраҡ, ҡаршы өндәште:

— Ә миңә кемдер, был донъяла иң мөһиме — кеше эшенә ҡыҫылмау, тигән һымаҡ ине.

— Былар бит бер үк нәмә. — Герцогиня эйәген Алисаның иңбашына ныҒыраҡ батырҙы. — Һығымтаһы бының шунда: мәғәнә тураһында уйлаһаң, һүҙҙәр үҙе килә.

«Ҡалай ул бөтә нәмәгә лә һығымта табырға ярата», — тип уйланы Алиса.

— Һине биленДән ҡосаҡлап алмауыма аптырайһыңдыр? Ләкин мин һинең фламингоңа ышанып етмәйем. Ҡосаҡлайыммы әллә, нисек уйлайһың?

Алисаның ҡосаҡлатҡыһы килмәне, шуға:

— Ул тешләп тә ҡуйыр, — тине.



— Дөп-дөрөҫ. Ҡош семтеп алһа, борос һымаҡ әсетә. Һығымтаһы: был ҡанатлылар ҡанатҡанса ҡанығалар!

— Борос ҡош түгел бит!

— Һүҙең һәр саҡ хаҡ һинең! Һығымтаһы шундай: ир аҡылы бер алтын, ҡыҙ аҡылы мең алтын! — тип маҡтап ҡуйҙы Герцогиня.

Алиса бер аҙ уйлап торҙо ла, фекерен уртаға һалды:

— Минеңсә, борос — таш ул.

— Ысынлап та, таш, — Герцогиня Алисаның һәр һүҙе менән дә ризалашырға уйлағандыр. — Һығымтаһы шундай: тура һүҙ таш ярыр!

— Иҫемә төштө: борос — ул йәшелсә. Йәшелсәгә бик оҡшамаһа ла, борос — йәшелсә!

— Мин һинең менән тулыһынса килешәм. Һығымтаһы: яңғыҙ йәшелсә яҙ килтермәй. Юҡ, мин быны ябайыраҡ итеп әйтәйем: теге йәки был хәлдә һин, былай йәки тегеләй була алырмын, йәғни була алыр инем, тип бер ҡасан да уйлама, булғаны менән ҡәнәғәт бул.

— Быларҙы яҙып алғанда яҡшыраҡ аңлар инем, — тине Алиса.

— Әйтергә теләгәндә әйтер һүҙем менән сағыштырғанда был әле буш һүҙ! Әйтеп күрһәтәйемме?

— Зинһар, мәшәҡәтләнмәгеҙ.

— Тапҡан мәшәҡәт! Быға тиклем әйткәндәрҙең бөтәһен дә һиңә бүләк итәм.

«Шул да булдымы бүләк! Ярай әле тыуған көндә ундайҙы бүләк итмәйҙәр!» — тип уйланы Алиса, ләкин ҡысҡырып әйтергә баҙнат итмәне.

— Тағы ла уйландыңмы? — Герцогиня йәнә эйәген Алисаның иңбашына батырҙы.

— Ә ни эшләп миңә уйланмаҫҡа?

— Ә ниңә сусҡаға осоп йөрөмәҫкә? Ә һығымта...

Герцогиня ҡапыл шымып ҡалды. Алиса башын күтәреп ҡараһа, уларҙың алдында ҡулдарын күкрәгенә сатрашлап ҡуйып, асыулы ҡарап, Батша ҡатыны тора.

— Матур көн, Ғали йәнәп!— тип тауышын нәҙегәйтеп бышылданы Герцогиня.

Батша ҡатыны ҡысҡырып ебәрҙе:

— Мин һине һуңғы тапҡыр иҫкәртәм: һин йә үҙең, йә башың күҙебеҙҙән юғалырға тейеш. Һә тигәнсе һайла!

Герцогинянан шунда уҡ елдәр иҫте.

— Уйынды дауам итәйек, — тип бойорҙо Батша ҡатыны.

Алиса тамам ҡурҡып, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, унын артынан эйәрҙе.

Ҡунаҡтар, Батша ҡатыны булмағанлыҡтан файҙаланып, күләгәлә ял итергә ултырғайны. Уны күреү менән аяғүрә баҫтылар.

— Бер мәл оҙаҡлау бөтәһенә лә үлем язаһына әйләнер, — тип иғлан итте Батша ҡатыны.

Уйын барышында ул уйынсылар менән бер туҡтауһыҙ талашты. Тик уның тауышы ғына яңғырап торҙо:

— Башын киҫеп ташлағыҙ! Бының башын киҫеп ташлағыҙ!

Һалдаттар, урындарынан ҡуҙғалып, ҡунаҡтарҙы ҡулға алып китә торҙолар. Ярты сәғәт тә үтмәне, ҡапҡалар бөтөнләй бөттө, ҡулға алынған уйынсылар дер ҡалтырап яза көтә башланы.

Батша ҡатыны уйынды ташлап, Алисаға өндәште:

— Һин Гөбөргәйелде күрҙем тинеңме әле?

— Юҡ.

— Грифон тигән иптәше бар уның.

— Грифондың нимә икәнен дә белмәйем.

— Нисек инде белмәйһең?! Ул шундай йәнлек...

— Ишеткәнем дә, күргәнем дә юҡ.

— Әйҙә, киттек, уны ла күрерһең, Гөбөргәйелдең хикәйәһен дә тыңларһың, — тип Батша ҡатыны Алисаны бер яҡҡа тартты.

Китеп барған ыңғайға Алиса Батшаның:

— Беҙ бөтәгеҙҙе лә ғәфү итәбеҙ, — тигәнен ишетеп ҡалды.

«Бына яҡшы булды!» — тип шатланды Алиса. Әҙерләнгән язалар тураһында уйлап, ул бик ныҡ бошонғайны.

Тиҙҙән улар көн битендә йоҡлап ятҡан Грифон янына килеп сыҡты. (Әгәр һин Грифондың ниндәй икәнен белмәһәң, һүрәткә ҡара.)

— Тор, ялҡау нәҫтә! Ошо ҡыҙыҡайҙы Гөбөргәйел янына илтеп ҡуй, ул үҙенең хикәйәһен һөйләп бирһен. Минең ваҡытым юҡ, ҡайтып, тәғәйенләнгән язаларҙың үтәлеүен ҡарарға кәрәк,— тине Батша ҡатыны.

Ул киткәс, Алиса Грифон менән икәүҙән-икәү ҡалды.

Грифон үтә йомшаҡ күренмәһә лә, Батша ҡатынына ҡарағанда тынысыраҡ булыр, тип уйланы Алиса.

— Бына көлкө! — тип бышылданы Грифон.

— Нимәһе көлкө?

— Көлөрлөк тә, иларлыҡ та. Әйтер инде! Язалап үлтереү! Ғүмерҙә булмаған нәмә! Ярай, әйҙә, киттек!

«Бында бөтәһе лә «әйҙә киттек!» тип бойора. Ғүмерем буйы ла шул тиклем бойорманылар миңә!» — Грифон артынан барған саҡта Алиса шулай уйлап ҡуйҙы.

Әҙме-күпме барғас, улар тау киртләсендә йөрәге ярылғандай көскә тын алып ятҡан Гөбөргәйелде күрҙеләр. Алиса бахырҙы ихлас күңеленән йәлләп ҡуйҙы.

— Ә ул нимәгә ҡайғыра?

Грифон тас баяғыса яуап бирҙе:

— Ҡайғыра! Әйтерһең инде! Ғүмерҙә булмаған нәмә! Әйҙә, киттек!

Гөбөргәйел мөлдөрәп йәш тулған күҙҙәре менән килеүселәр яғына ҡараны. Ләкин бер һүҙ ҙә өндәшмәне.



— Был ҡыҙ һинең хикәйәңде тыңларға килде. Һөйләп бир әкиәтеңде!

— Ярай, мин һөйләрмен... — Гөбөргәйел тоноҡ ҡына тауыш сығарҙы. — Тик алдан уҡ киҫәтеп ҡуям: мин һөйләп бөткәнсе, ауыҙығыҙҙы ла асмай шым ултырығыҙ.

Грифон менән Алиса уңайлыраҡ итеп таш өҫтөнә ултырҙы. Бер аҙға тынлыҡ урынлашты. «Бер ҙә башлай алмаған, нисек бөтөрә алыр икән», — тип уйланы Алиса.

Ни хәл итәһең инде — сабыр ғына көтөргә тура килде.

— Борон заманда мин йәш Гөбөргәйел инем.

Тағы тынлыҡ. Ваҡыты менән Грифон тамаҡ ҡырып ҡуя, Гөбөргәйел көрһөнөп тын ала. Алиса тороп: «Бик ҡыҙыҡлы хикәйәтегеҙ өсөн ҙур рәхмәт», — тип әйтергә генә йыйынғайны, Гөбөргәйел йәнә телгә килде.

— Беҙ бәләкәй саҡта мәктәпкә йөрөй инек. Уҡытыусыбыҙ ҡарт Гөбөргәйел була торғайны. Беҙ уны Оҙайтҡыс тип йөрөттөк.

— Ә ни эшләп һеҙ уны Оҙайтҡыс тип йөрөттөгөҙ? Ысынында гөбөргәйел булғас ни...



— Сөнки ул оҙаҡ һөйләп, һабаҡты көндән-көн оҙонға һуҙа торғайны.

— Ә нисәшәр сәғәт була торғайны һабаҡтарығыҙ?

— Беренсе көн — бер сәғәт, икенсе көн — ике, артабан да шулай. Һабаҡ бит үҫергә тейеш.

— Бына ҡыҙыҡ мәктәп! — Алисаны был бик ныҡ ғәжәпләндерҙе. Бер аҙ уйлап торғас, ул:

— Ә егерме дүртенсе көндә егерме дүрт сәғәт уҡынығыҙмы? — тип һораны.

— Эйе шул, уҡыныҡ.

— Ә егерме бишенсе көндә ни эшләнегеҙ һуң?

— Шундай ябай нәмәләрҙе белмәгәс, һорарға оялыр инең, исмаһам, — тип ҡыҫылды Грифон.

Икеһе лә Алисаға текләп ҡараны. Алиса ер ярылһа, шунда төшөп китерҙәй булды. Әҙерәк торғас Грифон Гөбөргәйелде:

— Йә, йә, ҡарт иптәш, йәһәтлә! Көнө буйы бында ултырып булмаҫ! — тип ҡабаландырҙы.

— Мәктәпкә йөрөнөк тип әйткәйнем инде. Мәктәбебеҙ диңгеҙ төбөндә ине, һин быға ышанмайым тиһәң дә...

— Мин бер тауыш-тын да сығарманым, — тип ҡаршы төштө Алиса.

— Ә мин әйттең тим!

— Ҡаршылашма! — һүҙгә Грифон да ҡушылды.

Алиса бер һүҙ ҙә өндәшмәй тик ултырырға булды.

— Беҙ бик яҡшы белем алдыҡ. Әлбиттә, көн һайын мәктәпкә йөрөй торғайныҡ бит...

Алиса түҙә алманы:

— Мин дә мәктәпкә көн дә йөрөнөм. Быны ң бер яңылығы ла юҡ!

— Өҫтәмә һабаҡтар ҙа булдымы? — тип шикләнеп һораны Гөбөргәйел.

— Эйе. Музыка менән француз теле.

— Ә кер йыуырға өйрәттеләрме?

— Әлбиттә, юҡ, — тип асыуланып яуап бирҙе Алиса.

— Мәктәбең бик яҡшы булмағандыр, — тине Гөбөргәйел тынысланып. — Беҙҙең мәктәптә гел «Музы-

каға, француз теленә, кер йыуыуға айырым түләргә» тип яҙыла торғайны.

— Диңгеҙҙә йәшәүселәргә кер йыуыуҙың кәрәге бармы ни?

— Белмәйем. Быға барыбер минең кеҫәнең көсө етмәй ине. Мин мәжбүри дәрестәргә генә йөрөнөм.

— Ниндәйҙәргә, мәҫәлән?

— Тәүҙә яғырға һәм утарға өйрәндек. Йәмһеҙ яҙыуҙы бөткәс, үсегеүҙәр менән мәсәләнеүҙәргә күстек.

— Йәмһеҙ яҙыу тураһында бер ҙә ишеткәнем юҡ ине.

— Ә матур яҙыу тураһында ишеткәнең бармы?

— Эйе, матур яҙыу дәфтәре бар, шунда ҡарап яҙаһың. Хәрефтәр йәмһеҙ булмаһа ғына уҡытыусы маҡтай.

— Ә йәмһеҙ икәнен ҡайҙан беләһең? Тәүҙә шуны өйрәнәләр бит!

— Ә тағы ла нимәләргә өйрәндегеҙ?

— Ҡытыҡлауҙы үткәс, бүлешергә, талашырға, алышырға өйрәттеләр.

— Ҡытыҡларға ла өйрәнергә кәрәкме ни? — тип тамам аптырап һораны Алиса.

— Ә һин нимә тип уйлайһың? Хәҙер тәнем ҡатҡан инде, күрһәтә алмайым. Грифон быларҙы бөтөнләй үтмәне.

— Мин махсус мәктәп бөтөрҙөм. Уҡытыусыларым ҡартайып бөткән Уҡбалыҡ менән Йәйен була торғайны. Дәрескә уҡ менән йәйә тотоп киләләр ҙә ярыш үткәрә башлайҙар. Инде уҡый торғас уҡбашҡа әйләнеп бөткәйнем, — тип һүҙгә ҡушылды Грифон.

— Ә тағы нимәләр өйрәндегеҙ? — тип ҡыҙыҡһынды Алиса.

Грифон һүҙҙе икенсегә борҙо:

— Бәлки, дәрестәр тураһында етеп торор? Гөбөргәйел, уйындарыбыҙ тураһында һөйләп бирәһеңме әллә?

## Унынсы бүлек

# ДИҢГЕҘ БЕЙЕҮЕ

Гөбөргәйел күрһенөп күҙ йәшен һөрттө, тыңлаусыларға күҙ йөрөтөп сыҡты, ләкин әйтер һүҙен әйтә алманы.

— Тамағыңа һөйәк ултырҙымы? — тип һораны Грифон һәм тотоп ҡабырсағынан ҡағып алды.

Гөбөргәйел, күҙ йәшен түгә-түгә, хикәйәһен дауам итте.

— Һиңә диңгеҙҙә оҙаҡ йәшәргә тура килмәгәндер...

— Юҡ, йәшәмәнем, — тине Алиса.

— Шуға күрә һиңә бер ҡасан да тере ҡыҫала осрамағандыр...

Алиса:

— Ләкин мин уны ашап ҡарағa... — тип әйтә генә башлағайны, ваҡытында һиҙеп ҡалды ла:

— Юҡ, күрмәнем, — тип һүҙен бөтөрҙө.

— Шуға ла һин ҡыҫала менән бейеүҙең нимә икәнен белмәйһең.

— Юҡ, белмәйем. Бейеүегеҙ нисегерәк була?

— Иң тәүҙә бөтәһе лә яр буйында рәткә теҙелешеп баҫа...

— Ике рәткә! — тип ҡысҡырҙы Грифон.

— Һөмбаштар, йәйендәр, суртандар һәм башҡалар. Ике аҙым алға баҫаһың да...

Грифон йәнә ҡысҡырҙы:

— Ҡыҫаланды ҡултыҡлап!

— Ике аҙым атлағас, ҡаршы торғандарға ташланаһың. Ҡыҫалалар менән алмашып, урыныңа тораһың. Һуңынан ҡыҫаланды тотоп йырағыраҡ диңгеҙгә...

— Ырғытаһың да, — тип урынынан һикереп торҙо Грифон — арттарынан йөҙәһең!

— Тәкмәс атып, йәнә ҡыҫалалар менән алмашаһың, — тине лә ҡомда мәтәлләп алды Грифон.

— Кире әйләнеп киләһең! Бына беренсе өлөшө шул, — тип тоноҡ тауыш менән бөтөрҙө Грифон.

Әле генә ҡысҡырышып, һикерешеп йөрөгән ике иптәш моңайып китте.

— Был бик матур бейеүгә оҡшаған,— тип күңелдәрен күтәрергә тырышты Алиса.

— Күргең киләме?

— Бик тә.

Гөбөргәйел дәртләнеп китте:

— Әйҙә тор, Грифон, бейеп күрһәтәйек. Ҡыҫалалар булмаһа ла ярай... Кем йырлай?

— Һин йырла. Һүҙҙәре иҫемә төшмәй тора.

Улар, Алисаның аяғына баҫа-баҫа, бейей башланы. Гөбөргәйел йырларға тотондо.

## БАЛЫҠТАР БЕЙЕҮЕ

*Түңәрәккә сыҡты Суртан,*
*Булам, ти, үҙем солтан.*

*Билен турайтты Көмрө,*
*Булғым килмәй, ти, бөкрө.*

*Бейергә төштө Сабаҡ,*
*Башына кейгән табаҡ.*

*Сүмесбаш кейгән сүмес,*
*Булмаһын, ти, үкенес.*

*Кемдер башына бәрҙе,*
*Сисеп ҡараһа — Бәрҙе!*

*Бәләкәй Алабуға*
*Ҡанаты менән һуға.*

*Һыла китте әйләнеп,*
*Йәш Сөгәне бейетеп.*

*Йәйелеп килә йәйен:*
*«Бағры мине күрмәһен!»*

*Шатланған була Шамбы,*
*Килеп етте шаршамбы.*

*Тартынып тора Ҡырпа,*
*Үсегеп ситтә йөҙә.*

*Әйҙә, Ҡырпа, бейеп ҡал,*
*Беҙҙең бейеү ҙә бөтә!*

— Ҙур рәхмәт, — Алиса бейеүҙең бөтөүенә шатланды. — Йырығыҙ миңә бик тә оҡшаны.

— Иҫемә төшкәндә, яңылыҡ һөйләйем әле. Минтайҙы күргәнең бармы? — тип өндәште Гөбөргәйел Алисаға.

— Эйе, уны беҙҙә төшкө ашҡа бирә торғайнылар.

— Ул һеҙгә төшкө ашҡа килә торғайны, тип әйтмәксеһеңдер, — тип дөрөҫләп ҡуйҙы уны Грифон.

— Уның менән таныш булғас, исемен ҡайҙан алғанын беләһеңдер.

— Юҡ.

— Бер заман ул: мин — балыҡ түгел, мин — тай, тип осраған бер балыҡҡа бәйләнде. Шул ваҡыттан бирле бөтәһе уны «минтай» тип ирештерә. Хәҙер Минтай Атбаш балыҡ менән дуҫлашып алған да бергә атлыҡса төҙөйҙәр. Әйткәндәй, яңылығым ошо ине.

— Хәҙер һин үҙең тураһында һөйлә,— тип тәкдим итте Грифон Алисаға.

— Мин бөгөн иртәнән башлап булған мажараларҙы һөйләйем. Ә кисә булғандарҙы һөйләмәйем, сөнки кисә мин бөтөнләй икенсе инем.

— Нисек икенсе, һөйлә, — тип һораны Гөбөргәйел.

— Юҡ, юҡ, тәүҙә мажаралар тураһында! — тип түҙемлеген юғалтып ҡысҡырҙы Грифон.

Алиса, Аҡ Ҡуянды күргән мәлдән башлап, бөтә хәлдәрҙе һөйләргә тотондо. Грифон менән Гөбөргәйел ауыҙ асып тыңлап ултырҙы. Зәңгәр Ҡарышлауыҡ менән осрашып «Шыршы менән терпе»не уҡып күрһәтергә маташҡанды һөйләгәс, Гөбөргәйел: «Бик ғәжәп!», ә Грифон: «Ғәжәптән дә ғәжәберәк!» — тип ҡысҡырҙы.

— Берәй шиғыр уҡытып ҡарайыҡ.

— Аяғүрә баҫып, «Һарыҡты кем ашаған?» тигән мәҫәлде уҡып күрһәт,— тип ҡушты Грифон.

«Тоталар ҙа шиғыр һөйләтәләр, — тип уйланы Алиса. — Мәктәптәме ни!» Ләкин ул буйһонорға мәжбүр булды, урынынан торҙо ла уҡый башланы. Уйҙарын баяғы балыҡтар бейеүе биләп алғас, мәҫәл дә икенсе төрлө һымаҡ килеп сыҡты.

## САБАҠТЫ КЕМ АШАҒАН?

*Бер Балыҡсы ауға сабаҡ тотҡан.*
*Алып та өлгөрмәгән, сабаҡ юғалған.*
*Бер-ике көн үтеп киткәс, беҙҙең Балыҡсы:*
*«Суртан ашаған сабаҡты», — тигән хәбәр алған.*

*Быны ишеткәс, аусы сикһеҙ асыуланды.*
*Йыртҡыстарҙың был эшенә көйҙө, янды.*
*— Сабаҡтың үсен алмай ҡалмамын, — тип*
*Балыҡтарға ҡаты һорау ҡуйҙы.*

*Әүәл суртан: «Ашаманым», — тине, танды.*
*Бәрҙе лә тоғролоғон һөйләп алды.*
*Һәммә балыҡ үҙҙәрен аҡланылар.*
*Бер яҡ ситтә, балыҡ түгел, ҡусҡар ҡалды.*

*Ҡусҡар, меҫкен, ҡурҡыуынан ҡалтыранды,*
*«Ашаусы мин түгел», — тип саҡ әйтә алды.*
*Ул шикле кеше һымаҡ яуап биргәс,*
*Бөтә балыҡ: «Ашаусы шул!» — тип һөрән һалды.*

*Ашамай ҡусҡар һис бер ваҡытта ит.*
*Әйтә алманы, ашаған мин түгел, тип,*
*«Сабаҡты ашаған дуңғыҙ ошо икән, —*
*Тине суртан. — Килтерегеҙ бәйләргә еп!»*

*Шул сәғәт әллә ҡайҙан еп таптылар,*
*Ҡусҡарҙың муйынына еп таҡтылар,*
*«Уҫаллығың язаһын бына тарт инде!» — тип*
*Балыҡсының ауылына оҙаттылар.*

*Суртан төҫлө йыртҡыстарға донъя тулған.*
*Һәр ҡайҙа яза күрер меҫкен ҡусҡар.*

*Зарарлы бәндә булып күренерһең,*
*Башҡаларға күңелең булмаһа ла тар.*

— Мин бала саҡта уҡыған мәҫәлгә бөтөнләй оҡшамаған был,— тине Грифон.

— Быңдай мәҫәлде минең дә ишеткәнем юҡ ине. Ысынлап әйткәндә, һин мәғәнәһеҙ юҡ-бар нәмә һөйләнең беҙгә!

Алиса бер һүҙ өндәшмәй ҡулдары менән башын тотто ла ҡомға ултырҙы. Берәй ҡасан элекке ҡыҙға әйләнермен тигән ышанысы ҡалманы.

— Ярай, ҡайғырма! — Грифон уны тынысландырырға тырышты. — Беҙ һиңә тағы ла бейеп күрһәтербеҙ, Гөбөргәйел йырын йырлар, теләйһеңме?

— Зинһар, йырҙы ғына, — тип үтенде Алиса.

— Йыр тиһәң — йыр, — тип үпкәләне Грифон. — Әйҙә, иптәш, йырлап күрһәт.

Гөбөргәйел йырларға ауыҙын ғына асҡайны, йыраҡтан:

— Суд килә! — тигән тауыш ишетелде.

— Йүгерҙек! — Грифон Алисаны ҡулынан тотоп һөйрәп алып китте.

— Ә кемде хөкөм итәләр? — тип көскә тын алып һораны Алиса.

Грифон ҡат-ҡат ҡабатланы:

— Тиҙерәк, тиҙерәк!

Диңгеҙ буйынан һаман Гөбөргәйелдең йыры ишетелә ине:

*«Бә-лә-кәй А-ла-бу-ға,*
*Ҡа-на-ты ме-нән һу-ға».*

Ул шымыраҡ, шымыраҡ ишетелде, шунан бөтөнләй тымды.

## Ун беренсе бүлек

# КҮМӘСТЕ КЕМ УРЛАҒАН?

Черви Батшаһы менән унын ҡатыны тәхеттә ултыра, суд бүлмәһе төрлө йәнлек, ҡош-ҡорт, кәрт эйәләре менән тулған. Тәхет алдында сынйырға быҒауланған Валет тора. Батша янында Аҡ Ҡуян темеҫкенеп йөрөй. Бер ҡулында — борғо, икенсеһендә — оҙон пергамент ҡағыҙ. Бүлмәнең уртаһына өҫтәл ҡуйылған, өҫтәл өҫтөндә ҙур батмуста күмәстәр өйөлгән. Улар ауыҙ һыуын килтерерлек итеп тәмле бешкән, хатта Алисаның шунда уҡ ашап ҡарағыһы килде.

«Тиҙерәк хөкөм итеп бөтһөндәр ҙә, күмәс таратһындар ине»,— тип уйланы Алиса.

Береһе лә ҡабаланмағас, ул ваҡыт үткәрер өсөн тирә-яҡты ҡарап сыҡты.

Быға тиклем Алисаның бер ҡасан да судта булғаны юҡ ине. Китаптарҙа ғына уҡығаны иҫтә ҡалған.

Бына судья. Парик кейгән кешеләр судья булырға тейеш.

Әйткәндәй, судья булып Батша үҙе кейенгән, парик өҫтөнә тажын ултыртҡан. (Нисеклеген күргең килһә, һүрәткә ҡара.) Бының бигүк матур күренмәүенән ул ҡыйынһына булһа кәрәк.

«Бынау ун ике урын присяжный заседателдәргә. Ә анау йән эйәләре — Алиса был һүҙҙе ҡулланырға мәжбүр булды, сөнки унда йәнлектәр ҙә, ҡоштар ҙа бар ине — присяжныйҙар».

Һуңғы һүҙҙе Алиса ике-өс тапҡыр ҡабатланы — был

сетерекле һүҙҙе белеүенә ул нык ғорурлана ине! «Тиҫтерҙәрем араһында был һүҙҙе аңлаусылар күп түгелдер», — тип уйланы Алиса. Ул хаҡлы ине.

Йәнлектәр грифель таҡталарына туҡтауһыҙ нимәлер яҙа.

— Нимә яҙалар икән? — тип Алиса шым ғына Грифондан һораны.

— Үҙҙәренең исемдәрен яҙалар. Суд бөткәнсе онотоп ҡуйыуҙарынан ҡурҡып.

— Ҡалай аңралар! — тип ҡысҡырҙы Алиса.

Шунда уҡ Аҡ Ҡуян:

— Суд залында тауышланмаҫҡа! — тип екерҙе.

Батша күҙлеген кейеп, асыулы ҡараш менән бүлмәне байҡап сыҡты.

Алиса бүтәнсә өндәшмәне, присяжныйҙарҙың ни яҙғанын күҙәтте. Тегеләр шунда уҡ: «Ҡалай аңралар!» — тип яҙырға тотондо. Етмәһә, кемдер «аңра» һүҙенең яҙылышын белмәй, күршеһенән һорай башланы.

«Былай булһа, суд бөткәнсе теләһә нәмә яҙып бөтөрөрҙәр!» — тип уйланы Алиса.

Берәүһенең грифеле нык шығырҙағас, Алиса, түҙемлеген юғалтып, уның артына барып баҫты ла, ваҡытын тап итеп, грифелен тартты ла алды! Быны ул шундай тиҙ эшләп өлгөрҙө, присяжный хатта (ә ул кескәй Бил ине) бер ни аңламай ҡалды; грифелен таба алмағас, бармағы менән яҙырға тырышып ҡараны, ләкин бынан бер нәмә лә килеп сыҡманы. Бармаҡ грифель таҡтаһында эҙ ҡалдырмай бит!

Батшаның тауышы яңғыраны:

— Ғәйепләү һүҙен уҡып ишеттерегеҙ!

Аҡ Ҡуян өс тапҡыр борғо ҡысҡыртты ла, ҡағыҙына ҡарап, бына нәмә уҡып ишеттерҙе:

Батша ҡатыны күмәс бешергән,
Һыуытырға тышҡа алып сыҡҡан.
Черви Валеттың башы шуға еткән,
Ете күмәсен алып та ҡасҡан.

— Ҡарар сығарығыҙ! — тип бойорҙо присяжныйҙарға Батша.



— Юҡ, юҡ, әле иртә. Бөтәһе лә ҡағиҙә буйынса башҡарылырға тейеш, — тип бүлдерҙе уны Аҡ Ҡуян.

Батша шунда уҡ иғлан итте:

— Шаһиттарҙан һорау алыу башлана! Беренсе шаһитты саҡырығыҙ!

Аҡ Ҡуян өс тапҡыр борғо ҡысҡыртты.

— Беренсе шаһит! — тип хәбәр итте ул.

Тупаҫҡай беренсе шаһит булып сыҡты. Бер ҡулына — сынаяҡ, икенсеһенә икмәк киҫәге тотҡан килеш тәхет алдына баҫты ул.

— Бында сынаяҡ тотоп килеүемде, зинһар, ғәфү итегеҙ, Ғали йәнәп! Мине алырға барғанда, нәҡ сәй эсеп ултыра инем. Эсеп бөтөп өлгөрмәнем.

— Өлгөрөргә кәрәк ине. Һин сәй эсергә ҡасан ултырҙың? — тип һораны Батша.

Тупаҫкай аптырап артында торған Май Ҡуяны менән Йоҡосо-сысҡанға әйләнеп ҡараны.

— Ун дүртенсе майҙа, шикелле, — тип ҡыйыуһыҙ ғына яуап бирҙе Тупаҫкай.

— Ун бишендә, — тип дөрөҫләне уны Май Ҡуяны.

— Ун алтыһында,— тип шыбырҙаны Йоҡосо.

Батша присяжныйҙарға бойорҙо:

— Яҙып ҡуйығыҙ!

Тегеләр шунда уҡ тырышып өс көндө лә яҙҙылар, өсөһөн дә бергә ҡушып, аҡсаға әйләндереп ҡуйҙылар.

— Эшләпәңде сис.

— Ул минеке түгел, Ғали йәнәп.

— Урланған! — тип шатланып ҡысҡырҙы Батша. Присяжныйҙар быны таҡталарына яҙып ҡуйҙы.

— Мин уларҙы һатыуға тотам, ә үҙемдекеләр юҡ, мин бит Эшләпә оҫтаһы, — тип аңлата башланы Тупаҫкай.

Батша ҡатыны, күҙлеген кейеп, Тупаҫкайға текләп ҡараны — тегенеһенең, ҡото осоп, тубыҡ быуындары ҡалтырап китте.

— Ҡалтыранма, тиҙ генә яуап бир, юғиһә, мин һине урыныңда уҡ язалап үлтерергә ҡушам, — тип үҙенсә тынысландырырға тырышты уны Батша.

Был һүҙҙәр Тупаҫкайҙы бер ҙә тынысландырманы, киреһенсә, уғата ҡурҡып, ул икмәк урынына сынаяғын тешләп алды.

Был мәлдә Алиса үҙендә әллә ниндәй ғәжәп үҙгәреш тойҙо. Эштең ниҙәлеген аңламай тора ине, ҡапыл һиҙеп ҡалды: ул үҫә башлаған!

Тәүҙә ул бүлмәнән сығып китергә уҡталды, ләкин әҙерәк уйлағас, үҙенә урын еткәнсе ҡалып торорға булды.

— Шул тиклем ҡыҫмаһаң булмаймы ни? — Әҙерәк торғас, Йоҡосо Сысҡан шулай тип һораны. — Мин саҡ тын алып ултырам.

— Үҫәм бит. Быға мин ғәйепле түгел.

— Бында үҫергә һинең хаҡың юҡ.

— Буш һүҙ әйтәһегеҙ, һеҙ үҙегеҙ ҙә үҫәһегеҙ бит, — тип батырланып китте Алиса.

— Эйе, тик мин тейешле тиҙлек менән үҫәм, ҡайһы берәүҙәр һымаҡ түгел... Былай үҫеү әҙәпһеҙлек!

Йоҡосо, асыуланып, икенсе урынға күсеп ултырҙы.

Шул арала Батша ҡатыны Тупаҫҡайға тексәйеп ҡарап торғандан һуң:

— Һуңғы концерттағы йырсыларҙың исемлеген килтерегеҙ! — тип ҡысҡырҙы.

Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән Тупаҫҡай бөтөнләй ебеп төштө.

— Яуап бир!

— Мин бәләкәй кеше, Ғали йәнәп. — Тупаҫҡай ҡурҡа-ҡурҡа һөйләргә кереште. — Сәй ҙә эсеп туйманым... Сәйгә ултырғаныма аҙнаға яҡын...Икмәк менән май ҙа бөтөп бара ине... Бер уйланып ултырғанда Май Ҡуяны әйтте лә...

— Мин бер нәмә лә әйтмәнем,— тип ҡабаланып уның һүҙен бүлдерҙе Май Ҡуяны.

— Юҡ, әйттең.

— Әйтергә уйымда ла юҡ ине. Мин бөтәһен дә инҡар итәм!

— Ул бар нәмәне лә инҡар итә! Быны протоколға индермәгеҙ! — тине Батша.

— Улай булғас, Йоҡосо әйткәндер, — Тупаҫҡай сысҡанға ҡарап алды. Ул бер нәмәне лә инҡар итмәй ине — йоҡоға талғайны.

— Шунан мин үҙемә икмәк телеп алдым да май яҡтым...

— Йоҡосо-Сысҡан нимә тип әйтте һуң? — Быны присяжныйҙарҙың береһе һораны.

— Мин иҫләмәйем.

— Иҫеңә төшөрөргә тейешһең, юғиһә, башыңдан яҙаһың, — тип иҫкәртте Батша.

Тупаҫҡай үҙенекен ҡабатланы:

— Мин ябай кеше...

— Һин ябай кеше лә, ябай шаһит та, — тине Батша.

Диңгеҙ сусҡаларының береһе ҡул саба башланы, ләкин



һалдаттар шунда уҡ урынына һеңдереп баҫырып ҡуйҙылар. Был ауыр һүҙ нимә аңлатҡанын әйтеп китәйем: һалдаттар, тоҡ алып, диңгеҙ сусҡаһын шунда тыҡтылар ҙа, токто бәйләп, өҫтөнә ултырҙылар.

«Быны үҙ күҙем менән күргәнемә мин бик шатмын. «Ҡаршылыҡ күрһәтеү урынында баҫылды...» тигәнде гәзиттә йыш күрә торғайным. Хәҙер уның ни икәнен үҙем дә белдем!» — тип уйланы Алиса.

— Әйтер һүҙең шул ғына булһа, хәҙер үк күҙҙән юғал! — тип бойорҙо Батша.

Шунда уҡ икенсе диңгеҙ сусҡаһы ҡул саба башланы, ләкин уны ла баҫырып ҡуйҙылар.

«Сусҡалар менән булашып бөттөләр, эш йәһәтерәк китер», — тип шатланған булды Алиса.

— Үҙ иркеңдәһең. Китергә мөмкин, — тип рөхсәт итте Батша Тупаҫҡайға. Тупаҫҡай суд бүлмәһенән атылып сығып китте.

— Урамда башын киҫеп ташлағыҙ шуның, — тип ҡушты Батша ҡатыны бер һалдатҡа.

Ләкин Тупаҫҡай йыраҡ китеп өлгөргәйне инде.

— Икенсе шаһитты саҡырығыҙ!

Был юлы Герцогиняның Ашнаҡсыһы шаһит булып сыҡты; ҡулына борос һауытын тотҡан; ул бүлмәгә инеп тә өлгөрмәне, арттағы рәттәр сөскөрә башланы; Алиса шунда уҡ хәҙер кем ингәнен һиҙҙе.

— Яуап бир,— тип талап итте Батша.

— Бирмәйем.

Батша кәңәш һорап Аҡ Ҡуянға ҡараны.

— Был шаһиттан ике яҡлап һорау алырға тура килер, Ғали йәнәп!

— Ике яҡлап булғас, ике яҡтан алырбыҙ, — тип ризалашты Батша.

Ул тәхетенән тороп Ашнаҡсы янына баҫты ла, йә бер яҡтан, йә икенсеһенән тороп һорау бирҙе:

— Күмәсте нимәнән бешерәләр?

— Әлбиттә, боростан, — тип яуап ҡайтарҙы Ашнаҡсы.

Арттан Йоҡосоноң тауышы ишетелде:

— Әлбиттә, кеҫәлдән.

Батша ҡатыны түҙемлеген юғалтып ҡысҡырырға тотондо:

— Был Йоҡосо Сысҡанды тотоғоҙ! Башын киҫеп ташлағыҙ! Ҡыуып сығарығыҙ! Баҫып ултыртығыҙ! Семтеп алығыҙ! Мыйығын өҙөп ташлағыҙ!

Бөтәһе лә Йоҡосоно тоторға ташланды. Ғауға күтәрелде. Барыһы ла тынысланып ултырғас, Ашнаҡсының юғалыуын күрҙеләр.

— Бына һәйбәт булды! Өсөнсө шаһитты саҡырығыҙ! — тип ҡысҡырҙы Батша һәм, тауышын әкренәйтеп, ҡатынына өндәште: — Хәҙер һин, ҡәҙерлем, үҙең ике яҡлап һорау алырһың инде, минең башым әйләнеп китте.

Аҡ Ҡуян исемлеккә ҡараны.

«Кемде саҡырырҙар икән,— тип уйланы Алиса.— Әлегә бер ниндәй ҙә дәлил тапманылар...»

Аҡ Ҡуян нәҙек тауыш менән шаһиттың исемен ҡысҡырҙы:

— А Л И С А!

## Ун икенсе бүлек

# АЛИСА ЯУАП БИРӘ

— Бында! — тип һикереп торҙо Алиса. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул бик ныҡ үҫеп өлгөргәйне, шуға күрә торған саҡта күлдәгенең итәге менән присяжныйҙар ултырған эскәмйәне ауҙарҙы.

Бөтә йәнлек аҫты-өҫкә әйләнеп осоп төштө. Алисаға улар үҙенең бәләкәй балыҡтарын хәтерләтте. Бынан бер аҙна элек ул аквариумын яңылыш эләктереп ауҙарғанда, балыҡтар ауыҙҙарын асып иҙәндә тыбырсынып ята ине.

— Ғәфү итегеҙ! — тип әсенде Алиса, йәнлектәрҙе тиҙ-тиҙ йыя башланы. Баяғы балыҡтарҙы иҫенә төшөрөп, присяжныйҙарҙы ла тиҙ генә йыйып урындарына ултыртмаһаң, үлерҙәр һымаҡ тойолдо.

— Бөтә присяжныйҙар ҙа урындарына ҡабат ултырғас ҡына суд эшен дауам итәсәк! — Батшаның асыулы тауышы яңғыраны. — Бөтәһе лә тип ҡабатлайым. Береһен дә ҡалдырмай! — Быны, Алисанан ҡарашын алмай, баҫым яһап әйтте Батша.

Алиса эскәмйәгә ҡараны. Ҡабаланып, кеҫәртке Кескәй Билде ул баш түбән ултыртҡан да, уныһы, ҡойроғон моңһоу һелтәп, әйләнә алмай ултыра ине. Алиса кеҫәрткене эскәмйәгә тейешенсә ултыртты.

«Дөрөҫөн әйткәндә, нисек ултырһа ла барыбер. Башы өҫтә булды ни, аҫта булды ни, судҡа унан бер файҙа ла юҡ»,— тип уйланы Алиса.

Присяжныйҙар әҙерәк тын алғас, эскәмйәнән осҡан саҡта юғалтҡан таҡта менән грифелдәрен табып, булған

ваҡиғаны һүрәтләй башланы. Бер Кескәй Бил ғына ауыҙын асып тик ултыра: күрәһең, һаман үҙ-үҙенә килә алмай.

— Һин әле ҡаралған эш тураһында нимә беләһең? — тип һораны Батша Алисанан.

— Бер ни ҙә белмәйем.

— Бөтөнләй бер нәмә лә? — тип ныҡышты Батша.

— Бөтөнләй бер нәмә лә! — тип ҡабатланы Алиса.

— Был бик әһәмиәтле. — Батша присяжныйҙарға ымланы.

Улар яҙып ҡуйҙы, ләкин хәбәрен ым-ишара менән ҡеүәтләп, Аҡ Ҡуян һүҙгә ҡушылды:

— Ғали йәнәп, әлбиттә, әһәмиәтһеҙ, тип әйтергә теләйҙер.

— Эйе, эйе, мин тап шулай тип әйтә башлағайным: әһәмиәтһеҙ! Әлбиттә, әһәмиәтһеҙ! — Аҡрын тауыш менән, ҡайһыһы матурыраҡ яңғырай икәнен сағыштырып, «әһәмиәтле — әһәмиәтһеҙ, әһәмиәтле — әһәмиәтһеҙ» тип ҡат-ҡат ҡабатланы Батша.

Присяжныйҙарҙың берәүҙәре «әһәмиәтле», икенселәре «әһәмиәтһеҙ» тип яҙып ҡуйҙы. Быны Алиса урынынан тормай ҙа яҡшы күрҙе.

«Барыбер мәғәнәһеҙ»,— тип уйланы ул. Был минутта Батша үҙенең яҙыу дәфтәренә нимәлер яҙып бөттө лә:

— Шым тороғоҙ! — тип ҡысҡырҙы. Шунан дәфтәренә ҡарап, бына нимә уҡып ишеттерҙе: «42-се ҡағиҙә. Кем дә кем бер саҡрымдан оҙонораҡ булһа, шул суд бүлмәһенән хәҙер үк сығып китергә тейеш».

Бөтәһе лә Алисаға ҡараны.

— Минең саҡрымға яҡын да буйым юҡ!

— Ә мин бар тием!

— Һин ике саҡрымға яҡын булырһың, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Батша ҡатыны.

— Мин бер ҡайҙа ла китмәйем. Ғөмүмән, был ҡағиҙә дөрөҫ түгел, һеҙ уны әле яңы ғына уйлап сығарҙығыҙ.

— Был иң боронғо ҡағиҙә! — тип ҡаршы төштө Батша.

— Ә ни эшләп һуң ул 42-се? Иң беренсе булырға тейеш!

Батша, асыуланып, дәфтәрен япты.

— Ҡарар сығарығыҙ, — тип бойорҙо ул присяжныйҙарға.

Аҡ Ҡуян урынынан һикереп торҙо:

— Ғали йәнәп, бында әле генә табылған дәлил бар.

— Нимә һуң ул?

— Был — хат... Мин үҙем уны уҡып өлгөрмәнем, ләкин, минеңсә, ул ғәйепләнеүсенең кемгәлер... яҙған хаты.

— Әлбиттә, кемгәлер. Ғөмүмән, хатты кемгә булһа ла төбәп яҙалар.

— Кемгә яҙылған һуң ул? — тип һораны присяжныйҙарҙың береһе.

— Бер кемгә лә түгел, — тине Аҡ Ҡуян. Хатты асып ҡарағас: — Был хат та түгел, шиғыр икән, — тип өҫтәне.

Икенсе присяжный һорау бирҙе:

— Кем ҡулы? Валеттыҡымы?

— Юҡ, тап шуныһы шикләндерә.— Присяжныйҙар юғалып ҡалды.

— Тимәк, берәйһенә оҡшатып яҙған, — тигән фекергә килде Батша. Присяжныйҙарҙың күңеле күтәрелеп китте.

— Ғали йәнәп, мин был хатты яҙманым, быны береһе лә иҫбатлай алмай. Унда исем күрһәтелмәгән, — тип телгә килде Валет.

Батша шундай һығымта яһаны:

— Бик насар, тимәк, берәй яуызлыҡ эшләргә ниәтең бар, юғиһә, бөтә намыҫлы кешеләр һымаҡ, исемеңде ҡуйыр инең.

Барыһы ла ҡул сапты, бер тапҡыр булһа ла, Батша ысынлап аҡыллы һүҙ әйтте.

— Ғәйеп раҫланды... — тип ҡысҡырҙы Батша ҡатыны. — Башын киҫеп...

Алиса быға ризалашманы:

— Буш һүҙ! Шиғырҙың нимә тураһында икәнен дә белмәйһегеҙ!

— Уҡы! — тип бойорҙо Батша Аҡ Ҡуянға.

Ҡуян күҙлеген кейҙе:

— Нимәнән башлайым, Ғали йәнәп?

— Баштан башлап, аҙағына тиклем уҡы. Аҙағына ки-

леп еткәс — туҡтарһың! — тип эре генә аҡыл өйрәтте Батша.

Ҡәбер тынлығы урынлашты.

Аҡ Ҡуян бына нимә уҡып ишеттерҙе:

*Беләмен, һин дә һөйләштең,*
*Улар шулай һөйләй.*
*Әйтте ул: «Бик тә мөләйем,*
*Ләкин йөҙә белмәй».*

*Ҡайҙа, ҡасан, нимә булған,*
*(Беҙ дөрөҫөн беләбеҙ).*
*Эште шунда ҡарар итһәк,*
*Беҙгә яуап бирмәгеҙ.*

*Мин уларға бирҙем берҙе,*
*Улар өстө һуҙһа ла.*
*Һеҙгә кире ҡайтарылды,*
*Минекеләр булһа ла.*

*Әлбиттә, ул ҡыҙыу кеше,*
*Ышан минең һүҙгә лә.*
*Башты өҙөп кенә ташлай,*
*Эштән сыҡҡың килһә лә.*

*Ул белмәҫкә тейеш быны.*
*(Яңылыш һөйләп ҡуйма).*
*Бында уның эше лә юҡ,*
*Беҙҙең сер ҙә тап шунда.*

— Был бик мөһим дәлил, — тип ҡулын ҡулға ышҡып шатланды Батша. — Бынан алда ишеткән яуаптар бөтәһе лә буш һүҙ. Хәҙер присяжныйҙар ҡарар...

Алиса Батшаға һөйләп бөтөрөргә бирмәне:

— Әгәр берәйегеҙ миңә ошо шиғырҙы аңлатып бирһә, шуға мин алты пенс аҡса бирәм, — тине ул. — Минеңсә, унда бер мәғәнә лә юҡ. — Тағы үҫеберәк киткәс, хәҙер уға бер кем дә ҡурҡыныс түгел ине.

Присяжныйҙар: «Уныңса, бында бер мәғәнә лә юҡ», — тип яҙҙылар, ләкин береһе лә аңлатырға ҡыйманы.

Батша һүҙ алды:

— Шиғырҙа мәғәнә булмағаны яҡшыраҡ та, аңлатып тораһы юҡ. — Батша шиғырҙы күҙ йүгертеп ҡарап сыҡты.

— Хәйер, ҡайһы бер нәмәне мин аңлата алам: «...Ләкин йөҙә белмәй».— Ул Валетҡа ҡарап:

— Һин йөҙә белмәйһең бит? — тип һораны.

— Ҡайҙан миңә! — Был дөрөҫ ине — ул ҡағыҙҙан яһалған.

— Ярай, аңлашылды! — Батша тағы ла шифырға ҡараны: "Беҙ дөрөҫөн беләбеҙ...» Бында, әлбиттә, беҙҙең суд хаҡында һүҙ бара. «Мин уларға бирҙем берҙе...» Бына нишләткән күмәсте Валет!

—Ләкин унда: «Һеҙгә кире ҡайтарылды...» тип әйтелгән дә инде,— тип һүҙгә ҡыҫылды Алиса.

— Әлбиттә, ҡайтарылды, — Батшаның йөҙөндә ҡыуаныс сағылды. Ул өҫтәлдә торған күмәстәргә күрһәтте. — Был билдәле! «Әлбиттә, ул ҡыҙыу кеше...» Һин, ҡәҙерлем, ҡыҙыуһыңмы? — тип һораны ул ҡатынынан аҡрын тауыш менән.

— Киреһенсә, мин бик баҫалҡымын. — Батша ҡатыны яуап бирҙе лә, кеҫәртке Кескәй Билгә ҡара һауытын бәрҙе. Яҙмай тик ултырған Билгә эш табылды: ул шунда уҡ морононан ағып төшкән ҡараға бармағын тығып, тырышып-тырышып таҡтаһына яҙа башланы.

— «Башты өҙөп кенә ташлай...» — Батша йәнә ҡатынына ҡарап алды. — Һин берәй ҡасан баштарҙы өҙөп ташлатҡаның бармы, ҡәҙерлем?

— Юҡ,— тине Батша ҡатыны һәм шунда уҡ Кескәй Билгә төртөп күрһәтеп:

— Башын киҫеп ташлағыҙ! — тип ҡысҡырҙы.

— Ә, аңлашылды, һин баштарҙы өҙөп түгел, киҫеп ташлайһың икән! — Батша көлөп ебәрҙе, ләкин береһе лә тауыш-тын сығарманы.

— Мин шаяртып әйттем! — тип асыуланды Батша.

Бөтәһе лә көлөп ебәрҙе.

Батша бөгөн егерменсе тапҡыр:

— Присяжныйҙар, ҡарар сығарығыҙ! — тип бойорҙо.

— Юҡ! Хөкөм сығарһындар! Ғәйепләме, түгелме — һуңынан ҡарарбыҙ! — тип сәрелдәне Батша ҡатыны.

Алиса ҡысҡырып ебәрҙе:

— Буш һүҙ! Нисек башығыҙға килә икән шундай юҡбар!

— Ауыҙыңды яп! — Батша ҡатыны ҡыҙара-бүртенеп китте.

— Мин һеҙҙе тыңламайым!

— Башын киҫеп ташлағыҙ!

Берәү ҙә урынынан ҡуҙғалманы.

— Кем һеҙҙән ҡурҡһын! — Алиса үҙенең ҡәҙимге буйына инде. — Һеҙ ни бары кәрт колодаһы ғына бит!

Был һүҙҙәрҙән һуң бөтә кәрттәр һауаға күтәрелде һәм Алисаның битенә бәрелде.

Алиса ҡысҡырып ебәрҙе, кәрттәрҙе ҡыуырға тырышты... Күҙен асып ҡараһа, ул яр буйында апаһының итәгендә ята, ә апаһы Алисаның битенә төшкән ҡоро япраҡтарҙы һепереп төшөрә.

— Уян, Алиса һеңлем! Бик оҙаҡ йоҡланың!

— Ниндәй ғәжәп төш күрҙем мин! — Алиса иҫендә ҡалған, һеҙ әле яңы ғына уҡып сыҡҡан мажараларҙы апаһына һөйләргә кереште.



# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Беренсе бүлек*
Ҡуян ояһы юлынан. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
*Икенсе бүлек*
Күҙ йәше күле. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .13
*Өсөнсө бүлек*
Түңәрәк буйлап йүгерешеү һәм тоттормаҫ ҡойроҡ. . . . . . 20
*Дүртенсе бүлек*
Кеҫәртке Бил торбанан осоп сыға. . . . . . . . . . . . . . . 27
*Бишенсе бүлек*
Зәңгәр Ҡарышлауыҡ кәңәш бирә. . . . . . . . . . . . . . . . 37
*Алтынсы бүлек*
Суҫҡа менән борос. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 45
*Етенсе бүлек*
Аҡылдан яҙған сәй табыны. . . . . . . . . . . . . . . . . 55
*Һигеҙенсе бүлек*
Батша ғаиләһенең уйыны. . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
*Туғыҙынсы бүлек*
Гөбөргәйел һөйләгән хикәйә. . . . . . . . . . . . . . . . 74
*Унынсы бүлек*
Диңгеҙ бейеүе. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
*Ун беренсе бүлек*
Күмәсте кем урлаған?. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 87
*Ун икенсе бүлек*
Алиса яуап бирә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 95

**ЛЬЮИС КЭРРОЛЛ**

К 25 Алиса мөғжизәләр илендә: Әкиәт. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1997. — 104 бит.

Мәшһүр әҫәр башҡорт телендә тәүге тапҡыр донъя күрә.

ISBN 5-295-02165-3

К $\frac{4804101000-51}{М\ 121\ (03)-97}$ 113-97

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-02165-3

©«Китап»

Литературно-художественное издание

*Для детей младшего и среднего школьного возраста*

**Льюис Кэрролл**

**АЛИСА В СТРАНЕ ЧУДЕС**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Сабир Шәрипов*
Мөхәррире *Гөлсирә Ғиззәтуллина*
Рәссамы *Владислав Байрамғолов*
Биҙәүсе мөхәррир *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректоры *Зөлфиә Ҡарабаева*

ИБ № 5801

Йыйырға бирелде 16. 12. 96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 26.05.97. Ҡағыҙ форматы 60x90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Тип Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 6.5. Шартлы буяу отт. 26.5. Иҫәп-баҫма таб. 4,77. Тиражы 4000 дана. Заказ № В947. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
"Башҡортостан" нәшриәте типографияһы. 450079, Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.